ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 май (һабанай) 2021

№ 19 (957)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Хаҡы - 705 һум 12 тин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Календарҙа...**

Башҡорт аты көнө булһын!



6-7

**Хәҡиҡәт бер нисәү булмай,**

йәки Ни өсөн мин тарихи әҫәрҙәргә һаҡсыл ҡараштамын?



6-7

**Ыҡ буйы башҡорттары**



6-7

**Тарихтың утлы мөһөрө**



8

**ТВ-программа** 14

ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

# ЕҢЕҮ ҠАНЫ

**Варшава, Белград, Бухарест, Будапешт ҡалаларын азат итеп, ярты Европаны урап ҡайтҡан атайым Ишбулды Әйүп улы Искәндәров һәм Харьков өсөн яу яланында ятып ҡалған ҡартатайым Камалетдин Шәмсетдин улы Баһауетдинов рухына арнайым.**




***Офоҡтарҙы ҡаҡты Еңеү саңы -***
***Йөрәгемдә атты Еңеү таңы!***
***Тамырҙарым буйлап ярһып аҡты***
***Һалдат атайымдың Еңеү ҡаны.***

***Изге ул ҡан илтте Еңеү заңын,***
***Еңеү тантанаһын,***
***Еңеү шаңын -***
***Оло майҙандарға һыймайынса,***
***Ауыл-ҡалаларҙың белмәй һанын,***

***Атлай ине Еңеү вариҫтары,***
***Иҫкә алып Еңеү тарихтарын:***
***Окоптарҙа,***
***Днепр,***
***Вислаларҙа,***
***Яулағанда Берлин рейх(ы)стагын,***

***Кемдәр ауған, кемдәр ятып ҡалған,***
***Кемдәр Европала яу ҡайтарған,***
***Еңеү байрағында - шулар ҡаны,***
***Дейеү тамағына ул ҡаҙалған!***

***Атай, олатайҙар - беҙҙең сафта,***
***Һаман, һаман тора улар һаҡта:***
***- Онотмағыҙ беҙҙең Еңеүҙе! - тип***
***Дәһшәт менән әйтә ошо хаҡта.***

***Офоҡтарҙы ҡаға Еңеү саңы -***
***Йөрәктәрҙә ата Еңеү таңы.***
***Ил тамыры буйлап ярһып аға***
***Һалдат атайҙарҙың Еңеү ҡаны.***

**Тамара ЮЛДАШЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙәр иҫтәлегенә ҡуйылған обелискылар һәм һәйкәлдәрҙе яңыртырға, тәртипкә килтерергә ҡушты. Ошо йүнәлештә һеҙҙә нимәләр эшләнә?***

***Руслан АБДУЛЛИН, Баймаҡ районы Йылым ауылының ир-егеттәр ҡоро етәксеһе, эшҡыуар:*** Беҙҙең ауыл "Айыҡ ауыл-2019" республика конкурсында ҡатнашып, районда - беренсе, ә Башҡортостанда икенсе урын яулап, аҡсалата приздарға лайыҡ булғайны. Билдәле булыуынса, был аҡсалар ауыл биләмәһен төҙөкләндереүгә тотонола. Беҙ ҙә шулай эшләнек. Иң тәүҙә 250 меңлек республика призына Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар иҫтәлегенә обелискты яңыртырға ҡарар иттек, сөнки 1984 йылдарҙа уҡ тимерҙән эшләп ҡуйылған һәйкәл бик иҫкергәйне. Баймаҡҡа барып, ҡара йәшмәнән яңы мемориаль комплекс проектын эшләттек, унан һуң район үҙәгенән оҫталар килеп, был эште үҙҙәре аҙағынаса матур итеп башҡарып ҡуйҙылар. Был һәйкәлдең һул яҡ стелаһына - һуғышта ятып ҡалған яугир ауылдаштарыбыҙҙың, ә икенсе яғына иҫән ҡайтып, ошо ауылда эшләгән, йәшәгән һәм вафат булған ветерандарҙың исемлеге яҙылды. Ауылдаштар был мемориаль комплекстың тирә-яғын таҙартып, йәшелләндереп, күҙ өҙмәй ҡарап торалар. Былтыр Еңеүҙең 75 йыллығына арналған тантана саралары ошо обелиск янында үткәрелде. Ауылыбыҙға йәм биреп, әллә ҡайҙан күренеп тора яугирҙарыбыҙға һәйкәл. Быйыл 9 майҙа ауылдаштар менән тағы ла ошонда йыйылырбыҙ. Әле тантаналы сараларға, "Үлемһеҙ полк" акцияһына әҙерләнәбеҙ. Балалар ауылыбыҙ ғорурлығына әйләнгән был мөһабәт мемориал янында шиғырҙар һөйләр, йыр-моң яңғырап торор. Стелаға яҙылған исемлектәге яугирҙарҙың туғандары, яҡындары улар хаҡында иҫтәлектәре менән уртаҡлашыр.

12+

ХӘТЕРКИТАП



# КҮҘҘӘН ҮТКӘРӘЙЕК

## Башҡортостан һалдаттарының яртыһы кире ҡайтмаған

● Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән республика хәрби комиссариаттарына меңдәрсә кеше ғариза яҙа. Хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ һәм оло йәштәге ир-ат хеҙмәт армияһына алына.

● 1941 йылдың 1 октябренән республика территорияһында 16-50 йәшлек ир-егеттәргә хәрби күнекмәләр үткәрелә башлай. Республикала танкыларҙы, автоматсыларҙы, пулеметсыларҙы, минометсыларҙы, кавалеристарҙы, снайперҙарҙы, элемтәселәрҙе юҡ итеүгә әҙерләүсе подразделениелар әҙерләнә.

● Һуғыш йылдарында Башҡортостандан хеҙмәт армияһына 106 меңдән ашыу кеше мобилизациялана. Улар Урта Урал ГРЭС-ында, Силәбелә Киров заводында, Свердловск, Пермь һәм Силәбе өлкәләре шахталарында, Үрге Иҫәт һәм Яңы Тагил металлургия заводтарында, торф сығарыуҙа эшләй.

● Һуғыш йылдарында Башҡортостандан фронтҡа 710 мең кеше китә, уларҙың 300 мең самаһы һәләк була, 50 меңе инвалид булып ҡала.

## 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһынан иң күп Советтар Союзы Геройы сыға

● Республиканың һуғышҡа хәрби өлөшө - ул күп һанлы хәрби формированиелары:
- 6 уҡсылар дивизияһы,
- 4 кавалерия дивизияһы,
- 2 уҡсылар бригадаһы,
- 13 айырым артиллерия полкы,
- 4 бронепоезд. Улар барыһы ла Еңеү тарихына ҙур өлөш индерә.

● Кавалерия дивизияларынан хәрби хәрәкәттәрҙә берәү - билдәле 16-сы гвардия (112-се) Башҡорт кавалерия дивизияһы ғына ҡатнаша. Ул 1941 йылда тулыһынса республика халҡынан туплана.

● Дивизия Волганан Эльбаға тиклем дүрт мең километрҙан ашыу юл үтә, частары резерв менән тулылана (1943 йылда), ике тапҡыр тулыһынса тиерлек яңыртыла. Дивизияның 3860 яугиры ордендар һәм миҙалдар менән наградлана.

● 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Ҡыҙыл Армияның 78 яугиры Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ һәм биш кешеһе Дан орденының тулы кавалеры булған берҙән-бер кавалерия берләшмәһе була.

● Дивизияның беренсе командиры Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районының хәҙерге Шайморатов ауылында тыуған генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов (1941 йылдың декабренән) була. 1943 йылдың 23 февралендә Украинаның Ворошиловоград өлкәһе Петровское һәм Юлино (Штеровка) ауылдары араһында полк дошман тылына рейдтан сыҡҡан ваҡытта Шайморатов батырҙарса һәләк була. Унан һуң дивизия командующийы итеп Григорий Белов (февраль 1943 йыл - май 1945 йыл) тәғәйенләнә.

ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

# ҮЛЕМҺЕҘҘӘР

*Еңеп ҡайтҡан яугирҙарҙың сафында,*
*Тыныс илдең һау ирҙәре рухында*
*Ятып ҡалған батырҙарҙың йәне бар,*
*Мәңгелектә һүнмәй торған шәме бар.*

*Мәңгелектә улар һаман йәш, матур,*
*Башҡайҙары остарында аҡ сатыр.*
*Бик күптәрен ҡосаҡлаған ят тупраҡ,*
*Шыбыр-шыбыр серен һөйләй ят япраҡ.*

*Күләшһеҙҙәр, йәрлеләр ҙә - бер рәттә,*
*"Ватан" тигән әләм еле йөрәктә,*
*Ғәзиз ине һәр кемегә Ер-Әсә,*
*Дошман ине фашист тигән хәрәсән.*

*Миллиондар ятып ҡалды. Ул афәт*
*Уңалмаҫҡа уйып һалды йәрәхәт.*
*Хәбәрһеҙҙәр, ҡәберһеҙҙәр, исемһеҙ...*
*Хәсрәттәр тик бер йөрәктә, күсемһеҙ.*

*...Үлемһеҙҙәр сафҡа баҫҡан. Киң урам.*
*Күктә йәндәр. Ерҙә шәмдәр. Гимн. Ура!*
*Ризамы һеҙ, ятып ҡалған яугирҙар?*
*Башын эйеп йәшен һөртә һау ирҙәр.*

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙар иҫтәлегенә ҡуйылған обелискылар һәм һәйкәлдәрҙе яңыртырға, тәртипкә килтерергә ҡушты. Ошо йүнәлештә һеҙҙә нимәләр эшләнә?**

*Таһир ЮНЫСОВ, Хәйбулла районы Оло Әбеш ауыл хакимиәте башлығы:* Үҙегеҙгә мәғлүм, Бөйөк Ватан һуғышының тере шаһиттары - унда ҡатнашып иҫән ҡайтҡандар һаны бөтә ил һәм республикабыҙ буйынса көндән-көн кәмей. Хәйбулла районында, мәҫәлән, улар ни бары өсәү генә, ә беҙҙең Оло Әбештә, үкенескә, берәү ҙә ҡалманы. Тыл ветерандарының да бишәүһе генә иҫән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һуғыш яландарында баш һалған һәм еңеү менән тыуған ауылдарына әйләнеп ҡайтҡан ветерандарыбыҙ исемдәрен мәңгеләштереү буйынса әүҙем эшләйбеҙ һәм улар хаҡында иҫтәлектәрҙе ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ, сөнки был киләсәк быуын - беҙҙең балалар һәм ейәндәр өсөн кәрәк: үткәнен белмәгәндең киләсәге юҡ, ти бит халыҡ аҡылы ла.

Беҙҙең Оло Әбештә электән колхоз төҙөткән ҙур, матур обелиск бар. Беҙ уны даими ҡарап, йүнәтеп торабыҙ. Быйыл өс йыл элек "Аныҡ эштәр" махсус программаһы сиктәрендә беҙ уны яңыртып, ремонтлап, тирә-яғын матур тимер рәшәткәләр менән кәртәләп алдыҡ, ултырып ял итеү өсөн эскәмйә ҡуйып, эргә-тирәһен йәшелләндергәнек, обелиск тағы ла күркәмләнеп, мөһабәтләнеп киткәндәй булды, заманса төҫ алды. Йыл һайын тирәягын йыйыштырып, буяп, сәскәләр ултыртып, ҡарап ҡына торабыҙ. Был обелискының йөҙөнә һуғыштан әйләнеп ҡайта алмаған ауылдаштарыбыҙ, шулай уҡ иҫән ҡайтып, ауылыбыҙҙа эшләп, ғүмер кисереп вафат булған ветерандар исемлеге яҙылған. Беҙҙең ауыл хакимиәте биләмәһендә бөтәһе 5 ауыл булып, әйтеүемсә, ошоға тиклем Оло Әбештә генә бындай обелиск бар ине. Шуға күрә беҙ йыл һайын бер ауылда ошондай һәйкәлдәр ҡуйып сығырға ҡарар иткәйнек. Былтыр иһә бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына уларҙы хатта ике ауылда - Ҙур Арыҫлангол менән Бәләкәй Арыҫланғолда эшләп ҡуйҙыҡ. Унан алдараҡ Һаҡмар-Наҙарғол менән Үрнәктә лә ике обелиск аҫҡайныҡ инде. Шулай итеп, хәҙер биш ауылда ла һуғыш ветерандары иҫтәлегенә һәйкәлдәр бар. Заманында Оло Әбеш ауыл Советы 9 ауылды берләштереп торған, ләкин ваҡыт уҙа килә шуларҙың дүртәүһе юҡҡа сыҡты, нигеҙҙәре генә тороп ҡалған. Уйлап ҡараһаң, бөткән ауылдарҙа ла бит ҡасандыр кешеләр йәшәгән, ил ҡеүәтен арттырыуға өлөш индереп, еңһыҙғанып эшләгән, афәт ҡупҡас, ир-егеттәр һыпырылып Тыуған ил азатлығын яҡларға яуға киткән, шунда ғәзиз баштарын һалған, иҫән ҡалғандары әйләнеп ҡайтыу менән емерек хужалыҡтарҙы күтәрергә, тыныс тормош төҙөргә тотонған... Уларҙың бөтәһенең дә исемшәрифтәре Оло Әбештәге ҙур обелиск диуарында бар. Шулай ҙа беҙ ана шул бөтөүгә дусар булған ауылдар урындарында ла ошонда тыуған яугир һәм ветерандар исемдәре яҙылған стелалар асыуҙы кәрәк тип таптыҡ. Былтыр, бөйөк Еңеүҙең 75 йыллыҡ юбилейы айҡанлы, беҙҙең ауыл биләмәһенә ҡараған Яңауыл (Ҡара көсөк) тигән ауылда тыуып үҫкән Советтар Союзы Геройы Ҡәйүм Әхмәтшин иҫтәлеген дә мәңгеләштереү маҡсатында һәйкәл астыҡ. Унда Геройҙың яҡташыбыҙҙың фотоһүрәте, ғүмер йылдары, башҡа мәғлүмәттәр яҙылды. Дөрөҫ, был ауыл да юҡ инде хәҙер, ләкин ҡаһарман яҡташыбыҙ һәм уның тыуған нигеҙе хаҡында бөтәһе лә белергә тейеш, тип уйлайым. Ауыл зыяратында ерләнгән ветерандар ҡәберлектәре лә ҡараулы, тәртипкә килтерелеп тора, фотоларын ҡуйып, исем, ғүмер даталарын яҙып сыҡтыҡ. Оло Әбештәге обелиск янынан кеше өҙөлмәй: уҡыусы балалар ҡатнашлығында һәр төрлө саралар үткәрелә, ниҡах тантанаһы мәлендә йәштәр килеп ошонда сәскәләр һала. Ауылдаштарыма, бигерәк тә балалар һәм йәштәргә фатиха биреп, көнтөн изге теләктә торған тынысыҡ һаҡсыһы - яугир һымаҡ тойола миңә был һәйкәлдәр...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса Бөтә Рәсәй тауыш биреүе бара. Федераль платформала Башҡортостанда йәшәүселәр үҙҙәренең ҡала-ауылында төҙөкләндереүгә мохтаж йәмәғәт киңлектәрен һайларға мөмкин. Иң күп тауыш йыйған объекттар киләһе йылға төҙөкләндереү өсөн биләмәләрҙең адресլы исемлегенә индерелә. Ҡыҙыу бәйләнеш телефонына мөрәжәғәт итергә мөмкин: 8-800-600-20-13 (бушлай һәм тәүлек әйләнәһенә).

✓2021 йылдың аҙағына тиклем Башҡортостанда рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һанын 35-36 мең кешегә тиклем кәмеетеү күҙаллана. Был турала БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников хәбәр итте. Хәҙер республикала рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны - 67 меңдән ашыу.

✓"Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант" акцияһында республиканың барлыҡ райондары һәм ҡалалары, Рәсәйҙең 18 төбәге, донъяның 13 иле ҡатнашты. Сит илдәге яҡташтарыбыҙҙан 7504 эш ҡабул ителгән. Диктантта барлығы 321 782 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 159 510-ы телде башланғыс кимәлдә белә, 106 794-е иркен аралаша, 55 478 кеше башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында яҙған.

✓Башҡортостан мәктәптәрендә һуңғы ҡыңғырау шәмбе, 22 майҙа, була. Дата 9-сы һәм 11-се класты тамамлаусылар өсөн берҙәм һуңғы ҡыңғырау байрамын ойоштороу көнө итеп билдәләнгән. Роспотребнадзор байрамды уҙғарыу өсөн тәҡдимдәр әҙерләгән. Документҡа ярашлы, балалар ҡатнашлығындағы сараны асыҡ һауала үткәрергә, уҡыусылар араһында социаль дистанцияны һаҡларға, бер тапҡыр ҡулланыла торған һауыт-һабанан файҙаланырға, битлек кейергә, бүлмәләрҙе елләтергә тәҡдим ителә.

✓Алдағы 40-50 йылда Башҡортостан "Сода" компанияһына яңы сеймал сығанағы булып Төйәләҫ яткылығы тороу мөмкин. Был хаҡта Сибайға эш сәфәре менән барғанда БР Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров белдерҙе. Хөкүмәт алдына Урал арьяғында яңы производство булдырыу бурысы ҡуйылған. Әле проект эшләнеү процесында. Карьер эшләй башлаһа, сеймалды тейәп оҙатыу автоматлаштырылаСаҡ. Тәүге составтың быйыл июнда уҡ оҙатылыуы планлаштырыла.

✓ *Башҡорт атын үҫтереүгә, һаҡлауға иғтибар бирелә башланы. Был бик ваҡытлы, тип уйлайым. Сөнки бөгөн башҡорт атын юҡҡа сығарырға маташыусыларҙан бигерәк, уны үҙҙәренеке тип раҫларға тырышҡандар ҙа бар.*

ХУПЛАЙЫМ!

# КАЛЕНДАРҘА...

## Башҡорт аты көнө булһын!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡорт аты көнөн булдырыу тураһындағы тәкдимен мин ҡуш ҡуллап хуплайым.**



Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов әйтеүенсә, аттарҙың халыҡ селекцияһы юлы менән сығарылған башҡорт тоҡомо хәүеф аҫтында. Был фекер менән тулыһынса килешәм. Ысынлап та, беҙҙең башҡорт атын итен күберәк алыу маҡсатында ауыр көүҙәле аттар менән аяуһыҙ ҡушыуҙары һөҙөмтәһе аяныслы булыуы ихтимал. Артабан да шулай барһа, башҡорт атының исеме тарихта ғына ҡалаһағына шигем юҡ. Башҡа тоҡом аттар менән ҡушыу сәбәпле, тиҙҙән уларҙың үҙенсәлекле сифаттары юғаласаҡ.

Башҡорт аты - башҡорт донъяһының уникаль күренеше ул. Уларҙың йыл әйләнәһенә тибенлектә йөрөп, үҙенә аҙыҡ табып көн итеүе, ысын мәғәнәһендә, мөғжизә бит. Башҡа тоҡомло аттарҙан айырып торған сифаттары бик күп уларҙың. Мәҫәлән, йөйен бик беленмәһә лә, ҡышҡа табан улар аҙ ғына бөҙрәләнеп торған оҙон йөн менән ҡаплана. Тап ошо үҙенсәлеге, йәғни бөҙрәләнеп торған оҙон йөн башҡорт атының иң төп билдәләренең береһе тип танылған. Әммә һуңғы ваҡытта уны күрмәҫкә, айырмаҫҡа тырышыусылар ҙа юҡ түгел. Ә бит тарихтан билдәле тағы бик күп ҡылыҡтары бар башҡорт атының. Борон-борондан Рәсәйҙә сыҙамлылығы менән һыналған ул, һыуыҡты ла, эҫене лә яҡшы үткәргән. Ҡапыл борола алыу һәләте, етеҙлеге хәрби походтарҙа, яуҙа, һуғышта юғары баһаланыуы ла билдәле. Был ҡыйыу, түҙемле, тыңлаусан, хужаһына ышаныусан һәм тоғро малҡайҙар өйрәтеүгә лә тиҙ бирелгән.

Бөгөн ҡайһы бер башҡорт тоҡомло тип йөрөтөлгән йылҡы малын ҡулға өйрәтеүе бик ауыр, тип әйткәндәрен ишеткәнем бар, сөнки башҡа тоҡомға ҡушыу юлы менән сығарылған аттарҙың тышҡы ҡиәфәте генә уға оҡшарға мөмкин. Башы ҙур, тура ҡабырғалы, киң маңлайлы, ҡыҫҡа ҡалын муйынлы, киң тура арҡалы булһа ла, холҡо икенсе тоҡомдоҡон алыуы бик ихтимал.

Март башында социаль селтәрҙәрҙә, республика райондарының береһендә тибендә йөрөгән башҡорт аттарының бер нисәһе һыуыҡта туңды, тигән хәбәр таралғайны. Был хәбәргә, мәҫәлән, мин ышанманым: башҡорт аты һыуыҡ елгә бирешмәй ул. Моғайын, башҡа тоҡомло атты ҡушыу юлы менән алынған йылҡы малы булғандыр. Башҡорт аты хужаһын тыңлай, шуға ла арба егеп, йөк ташыуға ла, һыбай йөрөүгә лә тиҙ өйрәнә.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда йылҡысылыҡты, шул иҫәптән башҡорт атын үҫтереүгә, һаҡлауға иғтибар бирелә башланы. Был бик ваҡытлы, тип уйлайым. Сөнки бөгөн башҡорт атын юҡҡа сығарырға маташыусыларҙан бигерәк, уны үҙҙәренеке тип раҫларға тырышҡандар ҙа бар. Йәнәһе лә, тап ошо ҙур башлы, тура ҡабырғалы, киң маңлайлы, ҡыҫҡа ҡалын муйынлы, киң тура арҡалы, ҡүндәм холҡло аттар бер ҡасан да башҡорттоҡо булмаған... Ҡымыҙҙы ла милли эсемлек булараҡ үҙҙәренә "көлеплөргә" генә торғандар ҙа юҡ түгел. Рәсәйҙә ҡымыҙ эсеп дауаланыу өсөн шифаханалар XIX быуатта беренсе булып башҡорт ерҙәрендә асыла башлауы, Толстой, Чехов, Аксаков кеүек билдәле урыҫ классиктарының унда дауаланыуы тураһындағы яҙмаларын бер нисек тә тарих биттәренән һыҙып ташлап булмай.

Бына ошондай "рейдерҙарса ҡул һуҙыусы"ларҙан яҡлау өсөн дә кәрәк Башҡорт аты көнөн булдырыу. Ошондай иҫтәлекле көн булдырылһа, уның сиктәрендә йылҡысылар өсөн башҡорт атын яҡлауға, һаҡлауға, үҫтереүгә арналған семинарҙар, төрлө фәнни-ғәмәли конференциялар, йылҡысылыҡ аҙыҡтары һатылған күргәҙмә-йәрминкәләр ҙә ойошторолоп, матур бер байрамға әйләндереп булыр ине.

**Закир ВӘЛИТОВ.**
**Көйөргәҙе районы.**

ХӘТЕРКИТАП

# КҮҘҘӘН ҮТКӘРӘЙЕК

### Һуғыш фронттарындағы ҡаһарманлыҡ

• Башҡортостан улдары Бөйөк Ватан һуғышының барлыҡ фронттарында ла һуғыша. Уларҙың 200 меңдән ашыуы орден һәм миҙалдар менән наградлана. 278 кеше Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, 35 кеше Дан орденының тулы кавалеры.

• Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов), Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин һәм Григорий Овчинников күкрәктәре менән дошман амбразураһын ҡаплап, үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

• 1943 йылдың ғинуарында Сталинград һуғышында 44-се уҡсылар дивизияһы составында Зөбәй Үтәғолов һәм Тимерәй Көбәкәев үлемһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Днепр өсөн алышта Валентин Паширов айырылып тора, уның командалығында танк взводы дошмандың 10 ут нөктәһен, ротаға тиклем һалдатын юҡ итә. Артиллерист Степан Овчаров яңғыҙы дошмандың дүрт танкыһын сафтан сығара, ә Григорий Ветошников һалдаттарҙы Днепр аша сығарғанда айырылып тора.

• Муса Гәрәев ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була, 250 хәрби осош яһай, Көнсығыш-Пруссия һөжүм итеү операцияһы ваҡытында айырылып тора.

• 1945 йылдың апрелендә рейхстагты алған һәм уның көмбәҙенә Ҡыҙыл Байраҡ ҡаҙаған яугирҙар араһында Мишкә районынан Ғәзи Заһитов та була.

• Башҡортостандан сығыусылар шулай уҡ партизандар хәрәкәтендә лә ҡатнаша. Украина партизан отрядтарында Б. Фәтхинуров, П. Ершов, С. Хәбиров ҡатнаша. Өфөлә тыуған И. Александров Белоруссияла партизандар отряды төҙөй. Украинала, Белоруссияла һәм Чехословакияла партизандар хәрәкәтен ойоштороусыларҙың береһе "Кара генерал" - Даян Мурзин була. Француз ҡаршылығында М. Шаһиев, А. Гришанин, Ф. Рыбаков, Г. Чернов, В. Елистратов айырылып тора, ә А. Коляскин ике йыл итальян партизандары менән бергә һуғыша. Майор Б. Г.Нәзиров Бухенвальд концлагерында ихтилал күтәргән йәшерен төркөмдө ойоштороусыларҙың береһе була.

• Башҡортостандан математика уҡытыусыһы өлкән сержант Әхәт Әхмәтйәновтың исеме фронт гәзиттәре битенән төшмәй. Ул данлыҡлы снайпер була. Гәзиттәрҙә уның сәпте эҙләүҙә һөҡланғыс уйлап табыуҙары, туп-тура атыу һәләте тураһында яҙыла. Шундай мәҡәләләрҙең береһе - "Поединок снайперов" 1943 йылдың 26 декабрендә "Красная Звезда" гәзитендә сыға.

### Өфө эре фәнни үҙәккә әүерелә

• 1941 йылдың йәйендә Өфөгә президенты Александр Богомолец етәкселегендә Украина ССР-ының Фәндәр академияһы күсенә. Академияның 11 институты һәм китапханаһы бөтә ҡала буйлап таратыла. Башҡортостандың баш ҡалаһы юғары уҡыу йорттары Мәскәүҙең, Ленинградтың, Киевтың билдәле ғалимдары, профессорҙары менән тулылана. Өфө институттарының күп кенә кафедраларын фән докторҙары һәм академиктар етәкләй. Мәҫәлән, Өфөлә эвакуацияла билдәле телсе-филолог, академик Леонид Булаховский йәшәй һәм эшләй.

• Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, һуғыш йылдарында Өфө институттарында 1,5 меңдән ашыу кеше уҡый белем ала. Ул ваҡытта төбәк өсөн был һан ысын мәғәнәһендә рекорд була.

• Енеүгә ғалим-медиктар ҙа үҙ өлөшөн индерә: һуғыш йылдарында Өфөлә гангренаға ҡаршы сыворотка эшләүҙе үҙләштерәләр. Уның ярҙамында Башҡортостан госпиталдәрендә тиҫтәләрсә мең яугир аяҡҡа баҫтырыла.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙар иҫтәлегенә ҡуйылған обелискылар һәм һәйкәлдәрҙе яңыртырға, тәртипкә килтерергә ҡушты. Ошо йүнәлештә һеҙҙә нимәләр эшләнә?***

***Иҙрис БАТЫРШИН, Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауыл хакимиәте башлығы:*** 9 май - үҙенсәлекле байрам: тантаналы ла, ҡайғы-хәсрәтле лә ул көн. Йырҙа йырланғанса, был күҙ йәштәренә сыланған байрам. Бөйөк Еңеү атай-олатайҙарыбыҙ, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең, миллиондарса һуғыш ҡорбандарының ғүмере, тиңһеҙ ҡаһарманлығы менән яуланды. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм уларға енеүҙе яҡынлатырға ярҙам иткән тыл эшсәндәренең исемдәре тарих биттәренә алтын хәрефтәр менән уйылды. Уларҙың исемшәрифтәре үҙҙәре тыуып-үҫкән ауыл һәм ҡала обелискыларында ла балҡып тора - уны укып, бөгөнгө һәм киләсәк быуындар кемгә бурыслы икәнен белһендәр өсөн. Быйыр, мәҫәлән, Әлмөхәмәт ауыл хакимиәтенең Булат ауылында Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына һәйкәл яңыртылды һәм ундағы исемлеккә тыл ветерандары ла өҫтәп индерелде. Был бик ғәҙел ҡарар булды, сөнки фронт ышаныслы тыл менән дә көслө ине. Ошо уҡ ауылда өс һуғышта ҡатнашҡан Хәйбулла Аллабирҙе улы Байрамғолов иҫтәлегенә таҡтаташ асылды. Әлмөхәмәт ауыл хакимиәте үҙәге - Целинный ауылында яугирҙарға обелиск яңыртылды, уға капиталь ремонт үткәрелде, тирә-яғына былтыр шыршылар ултыртып сыҡтыҡ. Үрге Әбдрәш менән Әлмөхәмәт ауылдарында ла һәйкәлдәр халыҡтың иғтибар үҙәгендә: былтыр бындағы ике обелиск та йүнәтелде, тирә-яғы сүпсарҙан таҙартылды, сәскәләр ултыртылды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда йәшәү минимумы дәүмәлен яңыса иҫәпләү тәртибе билдәләнә. Ул хәҙерге кеүек ҡулланыусылар кәрзине нигеҙендә түгел, ә территориаль коэффициентҡа тәҙәтмә менән Рәсәйҙә йән башына йәшәү минимумы дәүмәленән сығып иҫәпләнә. Бынан алда йәшәү минимумы квартал һайын иҫәпләнде. Закон ҡабул ителгәс, ул йыл һайын билдәләнә башлай. Закон проектында биш йыллыҡ күсеү осоро ҡаралған.

✓"Башхемп-Агро" йәмғиәтенең генераль директоры Эдуард Рамазанов "Инвестиция сәғәте" ултырышында Кушнаренко районында киндер майы, орлоғо һәм башҡа экологик яҡтан таҙа продукция етештереү заводы төҙөү ниәте тураһында һөйләне. Ҡатнашыусылар проектты хупланы. Инвесторға май культураларын үҫтереү өсөн ауыл хужалығы ерҙәрен ҡуртымға алыу йәһәтенән ярҙам күрһәтеләсәк.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәте буйынса, Башҡортостанда йышыраҡ Туймазы районы халҡы даими йәшәү урынынан күсеп китә. 2021 йылдың ғинуарында улар 416 кешегә кәмегән. Икенсе урынды Өфө районы биләй (236 кеше). Рейтингта өсөн урынды Мәләүеҙ районы алды (199). Бәләбәй һәм Белорет райондарында ла халыҡтың күпләп ситкә китеүе күҙәтелә. Ҡалалар араһында тәүге урында - Өфө, 2021 йылдың башында уны 1241 кеше ташлап киткән. Артабан иһә Стәрлетамаҡ (327), Нефтекама (212) һәм Салауат (211).

✓Бүрәт Республикаһының йылҡысы хужалыҡтары етәкселәренән торған делегация Иглин районына, фермер Хәсән Иҙиәтуллинға килде. Уларҙың төп маҡсаты - тәжрибә үҙләштереү һәм башҡорт тоҡомло аттар һатып алыу. "Хәҙер беҙ үрсетеү өсөн тап һеҙҙең тоҡомдо ҡарайбыҙ, сөнки уның сыҙамлы, һыуыҡҡа бирешмәүсән, әммә иң мөһиме - уны үрсетеүҙән иҡтисади һөҙөмтәлелек тураһында бик күп ишетеп беләбеҙ, - тип һөйләне "Ульдурга" йылҡы заводы рәйесе Булат Будажанаев.

✓Башҡортостан урмансылары 2021 йылда 3 тонна тубырсыҡ һәм орлоҡ йыйырға планлаштыра. Былтыр урман хужалыҡтарында ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙың 2,3 тонна орлоғо әҙерләнгән, шуларҙың 612 кг - шыршы, 1030 кг - ҡарағай, 500 кг имән орлоғо һ.б. Ылыҫлылар орлоғон иң күбе Бәләбәй, Йылайыр, Салауат һәм Стәрлетамаҡ хужалыҡтарында йыйғандар. Республикала 68 урман питомнигы һәм 11 теплица бар, уларҙа йыл һайын 50-60 миллон үрсетмәлек һәм сәсмәлек үҫтерелә.

*"Стәрлетамаҡ предприятиеһында етештереү өлкәһендә бер ниндәй ҙә яңылыҡ юҡ: улар фәҡәт тәбиғәттән байлыҡ ала ғына. Әгәр был артабан да шулай дауам итһә, беҙгә лә, балаларыбыҙға ла бер ниндәй яҡшы нәмә лә ҡалмаясаҡ".*

ҠЫҪҠАСА

# ХАҠТЫ АРТТЫРАЛАР...

✓ **Башҡортостанда автомобилдәрҙе мәжбүри эвакуациялау һәм уларҙы штраф туҡталҡаһында һаҡлау хаҡы арта. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа уҙған түңәрәк өҫтәлдә ошо хаҡта белдерелде.** Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта транспортты эвакуациялау һәм махсус туҡталҡала һаҡлау хеҙмәттәре 2012 йылда уҡ раҫланған тарифҡа ярашлы күрһәтелә. Уның буйынса еңел автомобилде махсус туҡталҡаға күсереү хаҡы - 1500 һум, бер сәғәт һаҡлау хаҡы - 25 һум. Был башҡа төбәктәргә ҡарағанда күпкә аҙыраҡ. Яңы хаҡтар арттырылған тариф буйынса ойошторола. Автомобилде махсус туҡталҡаға эвакуациялау хаҡы күп тигәндә - 2135 һум, һаҡлау 51 һум була. 2020 йылда Башҡортостанда 26459 транспорт махсус туҡталҡаға оҙатылған, 25414-е хужаларына кире ҡайтарылған.

✓ **Өфө 2021 йылда Рәсәйҙең йәшәү өсөн иң уңайлы ҡалалары араһында тәүге унау иҫәбенә ингән.** Социаль һорау алыуҙа илдең 36 эре ҡалаһы ҡатнашҡан. Тәүге урындарҙы Төмән, Ҡаҙан, Краснодар, Санкт-Петербург һәм Сочи ҡалалары биләй. Өфө - туғыҙынсы баҫҡыста. Яуап биреүселәрҙең 79 процентына баш ҡалала йәшәү оҡшай. Былтыр, 2014 йыл менән сағыштырғанда, автоюлдар һәм йәшел зоналарҙың хәл-торошо яҡшырған. Ә бына йәмәғәт транспортының үҫеше 4 процентҡа түбән баһаланып, 20 процент тәшкил иткән. Пандемия һөҙөмтәһендә кинотеатрҙар һәм театрҙар, шулай уҡ ресторандар эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе түбәнәйгән. 2014 йылда ла, быйыл да һәр яуап биреүсе бишенсе кеше Өфөлә маҡтарлыҡ нәмә булмауын билдәләгән.

✓ **Бөгөн Өфөлә бер- һәм ике бүлмәле фатирҙар, шулай уҡ бизнес-класс торлағы ҙур һорау менән файҙалана.** Фатир алыусыларҙың төп категорияһы - Себерҙә йәки төньяҡта эшләп, хаҡлы ялға сығып, республикаға ҡайтыусылар һәм төп йәшәү урыны итеп ҡаланы һайлаусы ауыл халҡы. Эксперттар белдереүенсә, пандемия халыҡҡа элекке кеүек 20 квадрат метрлыҡ "студия" түгел, ә 35-40 квадрат метрлы бер бүлмәле фатир алыу мөмкинлеген асҡан. Шулай уҡ баш ҡалала майҙаны 100 квадрат метр булған ҙур фатирҙарға ла һорау арта. Бизнес-класындағы икенсел торлаҡҡа ла һорау ҙур. Элек фатирҙарҙы Кипр һәм Төркиә менән алмашһалар, хәҙер Мәскәү, Санкт-Петербург, Краснодар һәм Ҡаҙан ҡалалары лидерҙар рәтендә.

✓ **Башҡортостанда махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләренә инеү хаҡтары раҫланды. Хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған тейешле ҡарарға Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған.** Документҡа ярашлы, "Еҙем", "Ирәмәл" һәм "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт парктарына инеү өсөн 200 һум түләргә кәрәк. "Асылыкүл" һәм "Ҡандракүл" парктарында ял итеү бер кешегә 250 һумға төшә. Башҡа махсус һаҡланған биләмәләргә инеү хаҡы - 150 һум. Бынан алда "Башинформ" Белорет районында Яланғас тауындағы турмаршрутта ағастарҙы ҡырҡыуҙары тураһында хәбәр иткәйне. Йәмәғәтселәр һәм урындағы халыҡ саң ҡаға башланы. Белорет районы башлығы Андрей Иванюта был хәлдә асыҡларға вәғәҙә бирҙе.

КӨНАУАЗ

# ТӘБИҒӘТ ОРАН ҺАЛА



**Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт (Росприроднадзор) етәксеһе Светлана Радионованың Башҡортостанға эш сәфәре Салауат ҡалаһынан, ундағы атмосфера һауаһының бысраныуына контролдең автоматлаштырылған станцияһын ҡарауҙан башланды.**

"Республикалағы экологик хәл беҙҙең хеҙмәт яғынан да иғтибар талап итә. Белгестәребеҙ уҙған йылда 700 миллионға зыян килтерелеүен асыҡланы. "Башҡортостан сода компанияһы" биләмәһен ҡарап сығыу миндә бер ниндәй ҙә ыңғай тойғолар тыуҙырманы", - тине Светлана Радионова, журналистарҙың һорауҙарына яуап биреп. Шунан ул "Башҡортостан сода компанияһы" эшмәкәрлеге һәм уның биләмәһе янында тирә-яҡ мөхиттe бысратыу проблемалары менән танышыуы һәм БСК тарафынан етештереү экологияһын яҡшыртыу буйынса күп йылдар аҡса бүленмәүе, хәҙер был мәсьәлә ҡәтғи дәүләт контролендә булаһағы хаҡында белдерҙе. "Стәрлетамаҡ предприятиеһы, асылда, Рәсәй территорияһында монополист. Шул уҡ ваҡытта унда етештереү өлкәһендә бер ниндәй ҙә яңылыҡ юҡ: улар фәҡәт тәбиғәттән байлыҡ ала ғына. Әгәр был артабан да шулай дауам итһә, беҙгә лә, балаларыбыҙға ла бер ниндәй яҡшы нәмә лә ҡалмаясаҡ. Тиҫтәләрсә йылдар килем алыусы компания былай эшләргә тейеш түгел. Бында шлам һаҡлағыстарҙы рекультивациялау проблемаһы бик киҫкен тора, шулай уҡ башҡа ҡатмарлыҡтар ҙа бар. Һәм беҙ был мәсьәләләрҙе хәл итеүгә кисекмәҫтән тотоноуҙы талап итәсәкбеҙ", - тине федераль ведомство етәксеһе.

Билдәләнеүенсә, йыл һайын етештереү эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә предприятиела 50 мең тоннанан ашыу зарарлы ҡалдыҡ хасил була. Ул Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә булдырылған шлам һаҡлағыстарға түгелә, ә был үҙ сиратында һыу объекттарының һыу аҫты һәм өҫкө экологияһын бысрата. БСК-ның юғары кимәлдә тупланған ағыулы ҡалдыҡтары Ғафури районының "Цветаевский" полигонына күмеү өсөн сығарыла. Унда кисекмәҫтән зарарһыҙландырылырға тейешле 100 мең тонналап ҡалдыҡ тупланған. Был проблеманы хәл итеү өсөн етештереүҙе модернизациялау, тупраҡ һәм һыу бысраныуҙарҙы бер урынға туплау һәм ҡалдыҡтарҙы эшкәртеү технологияһын индерергә кәрәк. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров был сараларҙың ҡыҫҡа ваҡытта ғәмәлгә индереләсәген белдерҙе: "Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә экологияны ил үҫешендә өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булараҡ билдәләп китте. БСК-ның элекке акционерҙары ҡылыҡтарына ҡарата республика халҡының асыуын аңлайбыҙ. Беҙҙең бурыс - етештереүҙе модернизациялау менән экологияға килтерелгән зыян проблемаһын хәл итеү мәсьәләһе араһында тигеҙлеккә өлгәшеү", - тине Андрей Назаров.

Росприроднадзор башлығы Светлана Радионова Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәтендә булып үткән кәңәшмәлә Башҡортостандың ҡайһы бер эре химия заводтары директорҙарына штатта эшләүсе экологтарын экологик проблемаларҙы күрергә һәм предприятие етәкселеге менән бергә законлдарҙы уҡырға өйрәтергә саҡырҙы. "Башҡортостан сода компанияһы" директоры Эдуард Давыдовтың предприятиела тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса сығышы федераль ведомство етәксеһенең асыуына тейҙе. Директор әйтеүенсә, БСК һуңғы биш йылда экологик саралар маҡсатында 5 млрд һум аҡса тотонған. Әммә тәбиғәтте һаҡлау ведомствоһы етәксеһе был аҡсаларҙың нимәгә сарыф ителеүен күрмәүе хаҡында әйтте: "Тәбиғәтте һаҡлау һылтауы менән аҡса теләһә нимәгә сарыф ителә: ҡоймаларҙы буяуҙы, продукцияны матур тышлыҡҡа төрөүме...Һеҙ экологик экспертиза тип атаған был ҡый-һай, шау-шоу өсөн мин ҡул ҡуймаясаҡмын. Эшлекле, намыҫлы проекттарға иһә беҙҙең мөнәсәбәт тә башҡаса булыр",- тине Светлана Радионова. Уның фекеренсә, БСК тәбиғәт байлыҡтары менән файҙалана, ә уны һаҡлау хаҡында уйламай. Компания 59 йыл буйына шлам һаҡлағыстарға рекультивация үткәрмәгән. "Йыл аҙағына тиклем экологик проект эшләнергә һәм минең өҫтәлдә ятырға тейеш. Тиҫтәләрсә йылдар буйы артыбыҙҙан йыйыштырмайбыҙ икән, был кешеләрсә түгел. Тәбиғәттән өлөш тартып алабыҙ, өҫтәүенә, бысратып, туҙҙырып китәбеҙ. Башҡортостанда изге тауҙарҙан башҡа тағы ла изге ер барын да онотмайыҡ, - тине Росприроднадзор етәксеһе С. Радионова. - Юғиһә, тейешле ведомстволар аша халыҡ-ара сифат сертификатын кире ҡайтарыу ихтималлығы ла бар, ә был продукцияны экспортлауҙа компанияға етди проблемалар тыуҙырасаҡ", - тип тә янаны ул.

Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров йылдар буйы был проблеманың йыйылып килеүен компанияның элекке хужалары сит илдәрҙә йәшәү сәбәпле, улар менән бәйләнеш булмауҙан, тип аңлатты. "БСК-ның оҙайлы үҫеше буйынса программа ҡабул ителде, уның өҫтөнлөклө йүнәлеше булып экология мәсьәләләрен хәл итеү бурысы ҡуйылды. Әле беҙ федераль Хөкүмәт менән берлектә компанияның директорҙар советын булдырыу буйынса эшләйбеҙ,"- тине Премьер.

Светлана Радионова үҙ сиратында республикала тупланған зыян реестрын урындағы халыҡ фекерен иҫәпкә алып төҙөргә һәм шуның нигеҙендә хәүеф янаған һәр объектҡа экспертиза үткәрергә кәрәклеген әйтте.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Ғәмәлдәге донъя чемпионы Тамара Таңһыҡҡужина (Өфө, Рәсәй) Польшала үткән шашка буйынса чемпионатта дәғүәсеһе Наталия Садовсканы (Варшава, Польша) еңеп, етенсе тапҡыр халыҡ-ара шашка буйынса донъя чемпионы исемен яуланы.

✓ 9 майҙа Бөйөк Еңеүҙең 76 йыллығына арналған хәрби хеҙмәткәрҙәр параады үтә. Ул иртәнге 10-да башлана. Сарала Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы хәрби техника, 12-се айырым инженер бригадалары техникаһы, заман хәрби техникаһы сафҡа баҫасаҡ.

✓ "Башҡортостан" лайф-стайл үҙәгендә республикала сауҙа үҙәгендәге беренсе намаҙ уҡыу бүлмәһе асылды. Был хаҡта Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратында белдерҙеләр. "Юлсы" проекты етәксеһе Алмаз хәҙрәт Вәлиев һүҙҙәренсә, әле тимер юл станцияларында ошондай бүлмәләр асыу хаҡында һөйләшеүҙәр алып барыла.

✓ Баш ҡаланың Минһажев урамынан Һәҙиә Дәүләтшина бульварына тиклемге 8 март урамы участкаһында реконструкция 2019 йылда башланғайны. Был участка аҡрынлап файҙаланыуға тапшырыла башланы. Мәҫәлән, Минһажев урамынан Әй урамына тиклемге ара июндә Ҡала көнөнә әҙер буласаҡ. Башҡа участкаларҙа төҙөлөш-монтаж эштәре дауам итә.

✓ Запастағы граждандарҙы 2021 йылда хәрби йыйындарға саҡыралар. Владимир Путин тейешле указға ҡул ҡуйған. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә һәм субъекттарҙың башҡарма власть органдарына граждандарҙы хәрби йыйындарға саҡырыуға һәм ошо йыйындарҙы үткәреүгә бәйле сараларҙы үтәүҙе тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән.

✓ Рәсәйҙә 16 йәше тулмаған балаларҙы йәмәғәт транспортынан төшөрөп ҡалдырған өсөн административ яуаплылыҡ индергән закон көсөнә инде. Автобуста, троллейбуста йәки трамвайҙа билеты булмаған йәки юл хаҡын түләй алмаған баланы төшөрөп ҡалдырған өсөн штраф янай. Водителдәргә - 5 мең һум, вазифалы кешеләргә - 20-30 мең һум.

✓ Рәсәй менән Египет араһында авиабәйләнеш тулы күләмдә тергеҙелгән. Был хаҡта Кремль сайтында хәбәр ителә. "Компетентлы хеҙмәттәр Рәсәйҙән Хургада һәм Шарм-эш-Шейх ҡалаларына рейстарҙы тергеҙеү параметрҙарын әҙерләй", - тиелә белдереүҙә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *1941-1944 йылдарҙа республика фронтҡа 362 вагон бүләктәр оҙата. Фронтовиктар өсөн барлығы 83 мең пар бийма, 21 мең ҡыҫҡа тун, 29 мең мамыҡ эсле куртка һәм салбар, 35 мең ҡолаҡсын бүрек һәм башҡа йылы әйберҙәр йыйыла.*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МАЙҘАНҒА - ҮҘГӘРЕШТӘР

**Рәсәйҙең билдәле скульпторы Салауат Щербаков менән архитектор Константин Донгузов Совет майҙаны реконструкцияһына үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итә. Әйткәндәй, тап улар ошо майҙанға ҡуйыласаҡ һәйкәл проекты буйынса уҙғарылған Бөтә Рәсәй конкурсында еңеп сыҡты. Уларҙың проектында генерал Шаймоnative Шайморатов ҡына түгел, ә легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының тарихы ла сағылыш таба.**

Майҙанды реконструкциялауға ни өсөн үҙгәрештәр индерергә кәрәклеген улар түбәндәгесә аңлата: "Бында өс ҡушымта бар: беренсеһе - һын үҙе, генерал Шайморатовтың әһәмиәте һәм ҡаһарманлығы, Бөйөк Ватан һуғышының, илдең һәм Башҡортостандың тотош тарихы; икенсеһе - Совет майҙаны, уның архитектураһы, совет дәүеренең классикаһы. Скульптурала романтик, героик ҡаһарманлыҡты берләштереү, башҡорт халҡының ҡаһарман рухын, совет характерын асып биреү өсөн майҙанды саҡ ҡына байрамса итеп үҙгәртергә, ҡаһарманлыҡ һәм хәтергә баҫым яһарға кәрәк. Өсөнсөһө - ошо ике теманы тоташтырыусы колоннада. Бындай архитектура Санкт-Петербургта, Ереванда һәм Өфөлә бар, шуға күрә эшлекле һәм рәсми майҙандан пафослы майҙан эшләү идеяһы тыуҙы. Бында Мәскәүҙәге Ҡыҙыл майҙандағы кеүек саралар, концерттар, тантаналы даталарҙы, ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған ваҡиғаларҙың юбилейҙарын билдәләргә мөмкин буласаҡ", - ти Салауат Щербаков.

- Конкурс башланыу менән миңә Салауат Александрович шылтыратты, уның шул саҡта уҡ үрәпсегән атта ултырыусы ҡурҡыу белмәҫ һыбайлы образын һынландырыу идеяһы бар ине һәм ул эш барышында ошо йүнәлештә маҡсатлы рәүештә эшләне. Конкурс эштәрен ҡарау ваҡытында ла был проект үҙенең ғәҙәти булмаған эмоциональлеге, экспрессияһы менән айырылып торҙо. Мин проектты архитектура элементтары менән тулыландырҙым. Композиция үҙәгенең - скульптура менән постаменттың - дөйөм хәрәкәте диагональ буйынса үҫешә. Скульпторҙарҙың күпселеге пластиканы постаменттың статик трактовкаһынан сығып үҫтерергә ҡарар итте. Салауат Александровичтың проектында постаменттың алға һәм үргә диагональ йүнәлешенең ҡеүәте асыҡ күренә: яугирҙар төркөмө, тау булып өйөлгән ҡорал, Берлин, Париж, Мәскәүҙең архитектура мотивтары, ут теле һәм төтөн йүнәлеше - барлыҡ был масса аттың ҡойроғона һәм аяғына һәм артабан һыбайлының фигураһына - уның буркаһына, аттың ялына, һыбайлының башына күсә. Был горизонталь мөйөшлө ҡеүәтле берҙәм хәрәкәтте барлыҡҡа килтерә. Әммә ул үҙе генә майҙанда шахмат таҡтаһындағы яңғыҙ һынды хәтерләтер ине, шуға күрә, һәйкәл майҙанда юғалып ҡалмаһын өсөн, майҙанды тағы ла тулыландырыу ихтыяжы - "1941", "1945" тигән ике ҙур обелиск шулай тыуҙы ла ине. Улар һәйкәл артында торорға һәм уларға 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы Геройҙарының һәм Дан ордены тулы кавалерҙарының исемлеге яҙылырға тейеш, - ти Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы Константин Донгузов.

Эштәрҙең беренсе этабын Республика көнө алдынан тамамлау күҙаллана.

Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров Совет майҙанын реконструкциялауға үҙгәрештәр индереү буйынса тәҡдимде ҡарау бурысын йөкмәтте.

# ТЕЛ СӘЙӘСӘТЕ НИСЕК?

**Республика Хөкүмәтендә мәғариф системаһында дәүләт тел сәйәсәтен тормошҡа ашырыу мәсьәләләре ҡаралды. БР Премьер-министр урынбаҫары Азат Бадранов етәкселегендәге түңәрәк ҡорҙа прокуратура, БР Башлығы Хакимиәте, БР Мәғариф министрлығы, Өфө ҡалаһы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, шулай уҡ уның ҡарамағындағы Республика ата-әсәләр комиссияһы вәкилдәре ҡатнашты.**

Азат Бадранов белдереүенсә, әлеге ваҡытта республикала Рәсәй Федерацияһының дәүләт телен, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен, шулай уҡ туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн кәрәкле шарттар булдырылған. Шул уҡ ваҡытта ата-әсәләрҙән туған телдәрҙе өйрәнеү буйынса мөрәжәғәттәр килеүен дауам итә. Азат Шамил улы күп милләтле йәмғиәттә тел сәйәсәтенең милләт-ара гармония менән бәйле булған нескә материя булыуын, шуға күрә был мәсьәләне сәйәсиләштерергә ярамауын билдәләне. Республиканың мәғариф системаһы халыҡтарҙың туған телен өйрәнеүгә ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерергә тейеш. Бының өсөн ресурстар ҙа, ҡануниәт нигеҙе лә бар.

Дөйөм белем биреү ойошмаларында туған телдәрҙе өйрәнеү торошо тураһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова һәм Ҡоролтай ҡарамағындағы Республика ата-әсәләр комиссияһы рәйесе Эльвира Байназарова таныштырҙы. Улар ата-әсәләрҙең балалары өйрәнергә тейешле туған телде һайлап ғариза яҙыуына ҡарамаҫтан, ошо конституцион хоҡуҡҡа күҙ йомоу осраҡтары булыуын белдерҙе. Йыйылыусылар артабан да бындай проблема күҙәтелгәндә прокуратура органдарына мөрәжәғәт итергә ҡарар итте. Федераль ҡануниәттә туған телдәрҙе өйрәнеү буйынса норма аныҡ яҙылған һәм ғаризалар һанының аҙ булыуы ғына туған телде өйрәнеүгә теләк белдереүселәргә мөмкинлек биреүҙән баш тартыуға нигеҙ була алмай. Түңәрәк ҡор барышында шулай уҡ туған телдәрҙе өйрәнеүгә төрлө ҡараш, шул иҫәптән селтәр бәйләнеше, тикшерелде. Мәҫәлән, Мәскәүҙә уҡыған уҡыусы Татарстан йәки Башҡортостан мәктәптәре менән бәйләнешкә инеп, онлайн дәрестәр алырға мөмкин. Шулай уҡ ҡатнашыусылар закондың барлыҡ нормалары үтәлһен һәм туған телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләһендә барлыҡ ҡыҙыҡһыныусы яҡтарҙың да ихтыяжы ҡәнәғәтләндерелһен өсөн башҡарма власть, прокуратура, йәмәғәт ойошмаларының көстәрен берләштерергә кәрәк, тип билдәләне.

*ХӘТЕРКИТАП*

# КҮҘҘӘН ҮТКӘРӘЙЕК

## Өфөгә тиҫтәләрсә завод эвакуациялана

• Республика сәнәғәте яңы шарттарға ҡулайлаша. Заводтарҙа миналар, снарядтар, гранаталар, авиабомбалар һәм башҡа хәрби продукция эшләү үҙләштерелә. Өфө паровоздар ремонтлау заводында бронемайҙансыҡтар һәм бронепоездар сығарыла башлай, нефть эшкәртеү заводтарында - бензин, автол, кәрәсиндең юғары октан сорттары, Белорет ҡорос-сым заводында - авиация тростары, пружиналар, Тирлән металлопрокатлау заводында - юғары сифатлы ҡорос ҡалайҙар.

• Һуғыш йылдарында республикаға йөҙҙәрсә сәнәғәт предприятиеһы, шулай уҡ илдең Ҡораллы Көстәренең ике академияһы - К. Е. Ворошилов исемендәге Генераль штабтың Юғары мәктәбе (Өфө) һәм В. И. Ленин исемендәге Хәрби-сәйәси академия (Бәләбәй) эвакуациялана. 1941 йылда Наркомавиапром фронт ихтыяжы өсөн продукция сығарған тиҫтәләрсә заводты Өфөгә күсерә.

• Предприятиелар менән бергә республикаға эшселәр эшелондары ла килә. Өфө генә 106 мең эвакуацияланыусыны ҡабул итә. Барлығы республикаға 247 мең кеше эвакуациялана. Улар торлаҡ, эш менән тәьмин ителә, балалары мәктәптә, институттарҙа уҡый.

• Үҙ ҡорамалдары менән эвакуацияланған күп кенә предприятиелар урындағылар менән берләштерелә. Запорожье, Гомель, Изюм, Станиславский паровоз ремонтлау заводтары Өфө ПРЗ-ында эшләй. Үрге Волга моторҙар эшләү заводы Өфө моторҙар эшләү заводы территорияһында урынлаша. Калуга шырпы фабрикаһы Өфө шырпы фабрикаһында эшләй. Белорус ССР-ының Микашевич фанера комбинаты Черниковка комбинаты менән берләштерелә.

• Мәскәүҙең "Электропровод", "Металлорукав", Подольскиҙың "Винилпровод", Одессаның "Электрошнур" һәм Харьков электромеханика заводтары берләштерелә. Республиканың электр-техника сәнәғәте танкылар һәм самолеттар өсөн электр ҡорамалдары, хәрби караптар өсөн ҡорамалдар, электр-акустика аппаратураһы, аккумулятор батареялары һ.б. сығара. Мәҫәлән, бары тик бер заводта ғына 20 төр элемтә аппараты эшләнә.

• Эвакуацияланған моторҙар эшләү заводтары, шул иҫәптән Рыбинск ҡалаһы, ҡатнашлығында Өфөлә авиация моторҙары эшләү предприятиеһы, хәҙерге УМПО булдырыла.

• Эвакуацияланған Рубежанск химия комбинаты базаһында Башҡортостанда химия сәнәғәте булдырыла. Өфөлә тоҙ кислотаһы, сода, хлор, хлорбензол сығарыла башлай. Тәбиғи каучук заводы файҙаланыуға тапшырыла.

• Өфөгә Ленинградтан эвакуацияланған "Красный треугольник" һәм Ярославлдән "Резинотехника" нигеҙендә Өфө резина-техник изделиелар заводы булдырыла. Завод Хәрби-диңгеҙ флоты өсөн ҡорамалдар сығара.

• Һуғыш йылдарында еңел сәнәғәттең яңы предприятиелары барлыҡҡа килә. Республикала Ҡыҙыл Армия һәм Хәрби-диңгеҙ флоты ихтыяжы өсөн кейем-һалым, аяҡ кейеме тегеү буйынса бик күп фабрикалар эшләй. Өфөлә Хәрби-диңгеҙ флотының № 200333 кейем склады урынлаша. Республикала тегелгән кейем флот буйынса таратыла.

• Шул йылдарҙа республикала урындағы яғыулыҡты (тәбиғи газ, торф, һоро күмер) әүҙем таба башлайҙар. Һуғышҡа тиклем асылған нефть сығанаҡтарына 1943 йылда асылған Кинйәбулат ятҡылығы ла өҫтәлә.

• Һуғыштың беренсе көндәрендә фронтҡа алынған эшселәрҙе хаҡлы ялдағы хеҙмәт ветерандары, ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмер балалар алмаштыра. Мәҫәлән, Белорет металлургия комбинатында ҡатын-ҡыҙ эшселәрҙең дөйөм һанының 60 процентын тәшкил итһә, Миндәк алтын табыу фабрикаһы эшселәренең 80 проценты ҡатын-ҡыҙ була.

• 1941-1944 йылдарҙа республика фронтҡа 362 вагон бүләктәр оҙата. Фронтовиктар өсөн барлығы 83 мең пар бийма, 21 мең ҡыҫҡа тун, 29 мең мамыҡ эсле куртка һәм салбар, өс мең тире жакет, 35 мең ҡолаҡсын бүрек һәм башҡа йылы әйберҙәр йыйыла.

• Бынан тыш, республика халҡы "Башҡортостан истребителе", "Башҡорт АССР-ына 25 йыл", "Башҡортостан комсомолы", "Салауат Юлаев", "Башҡортостан нефтсеһе", "Белорет металлургы" авиаэскадрильялары эшләү, "Башҡортостан уҡытыусыһы" танк колонналары һ.б. өсөн аҡса йыйып ебәрә. Республика халҡы Ҡыҙыл Армияны һәм Хәрби-диңгеҙ флотын ҡоралландырыу өсөн барлығы 255 миллион һум аҡса йыя.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымының күтәрелеүе

❖ Валериана, арыҫлан ҡойроғо, ромашка, мәтрүшкә, ҡырҡбыуын үләндәрен алдан әҙерләп йыйып ҡуйыу яҡшы. Кәрәк саҡта был үләндәрҙе тигеҙ нисбәттә алып бутап, түбәндәге ысул буйынса шифалы төнәтмәләр эшләргә була.

❖ 1 ҡалаҡ үләндәр йыйылмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, тулыһынса һыуынғансы төнәтергә. Өлкәндәргә көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ, балаларға көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә ярай. Дауаланыу мөҙҙәте - 1 аҙна. Был рецепт ҡан баҫымы юғары булғанда ла, йоҡоһоҙлоҡтан йонсоғанда ла ярҙам итә.

❖ 100-әр мл арыҫлан ҡойроғо, энәлек, пион, валериана төнәтмәләрен бергә ҡушырға. Шуға 25 мл бөтнөк һәм 50 мл эвкалипт төнәтмәләрен өҫтәргә. Килеп сыҡҡан ҡатышмаға ҡәнәферҙең (гвоздика) 10 бөртөк сәскә бөрөһөн өҫтәп һалып, ике аҙна ҡараңғы урында төнәтергә. Әҙер төнәтмәне ашарҙан 20-25 минут алда 50 мл ҡайнаған һыуға 15 - 20 тамсы тамыҙып, көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

## Гастрит

❖ Ашҡаҙандың кислоталылыҡ кимәле ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, гастриттың һәр төрөнән арынырға ҡайын һыуы ярҙам итә. Уны көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 100-әр мл эсергә кәрәк. Әммә бер айҙан да артыҡ эсергә ярамай. Файҙалы мәғлүмәт: ашҡаҙандың кислоталылыҡ кимәле юғары булған гастрит осрағында йәшел сәйҙән баш тартып торорға кәрәк. Ә бына кислоталылыҡ түбән булһа, йәшел сәй тик файҙаға ғына. Тик ас ҡарынға һәм эҫе көйөнсә эсмәҫкә.

## Организмды таҙартыу

❖ Бер ус ҡайын алҡаларына ярты литр араҡы ҡойоп, 7 көн төнәтергә, шунан һөҙөргә. Төнәтмәне 1-әр ҡалаҡ иртәле-кисле эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте - төнәтмә бөткәнсе. Был дауа бөтә организмды таҙарта: ҡурылдай, үпкә, быуындар, ҡан тамырҙарын.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Бишбүләк районы Аҙнай ауылынан ашъяулыҡта (кол. 6973-24) ҙур шаҡмаҡлы аласаның икеләтелгән киң һыҙаттары тоташҡан урында күтәреп һуғылған төрлө төҫтәге шаҡмаҡтар дүртешәрләп тупланған. Шаҡмаҡтарҙа өҙөк-өҙөк түшәм Ж хәрефенә оҡшаш фигураны барлыҡҡа килтерә.



*Биҙәкле аласа туҡыма (БР, Бишбүләк районы, Аҙнай ауылы). РЭМ. XX б. уртаһы*

Көньяҡ-көнбайыш өсөн һирәк күренеш булған аҡ-ҡыҙыл күтәреп һуғылған ҡунаҡ таҫтамалының биҙәктәре өс өлөшкә бүленеп торған, уны 1958 йылда Мәләүез районы Арыҫлан ауылында Н.В. Бикбулатов фотоға төшөрөп ала. Тикшеренеүсе яҙмаларына ярашлы рәүештә, таҫтамалдың оҙонлоғо 3,3 метр булған, киңлеге - 43 сантиметр. Уны 1908 йылда туҡыусы Г. Бураҡанова һуҡҡан (һөйләшкән мәлдә уға 67 йәш була, таҫтамалды йәш сағында бирнә өсөн әҙерләгән). Орнамент өс өлөшкә бүленһә лә, бөтәһендә лә бер төрлө: бер-береһенә инеп торған, тап килешкән мөйөштәре "йәшерелгән" ҡыя шаҡмаҡтар. Ҡайһы фигураларҙа тышҡы һыҙаты ҡат-ҡат ҡабатланып килә, ҡайһыларының эс яғы селтәрләнгән. Ерлек араһы ике төҫлө сатраш биҙәк менән тултырылған (буйғау һәм арҡауҙы ике еп һайын алмаштырыу). Орнамент бик тығыҙ, ул туҡыманың фактураһын билдәләй. Орнаменттың һәр рәте кәкерсәктәр менән ҡаймаланған.



*Ике яҡлы, фактуралы биҙәкле ҡунаҡ таҫтамалы (БР, Мәләүез районы, Арыҫлан ауылы). Н.В. Бикбулатов фотоһы, 1958*

Тауҙарҙа биҙәкле туҡыусылыҡ менән шөғөлләнмәгәндәр. Әммә 1960 йылда Бөрйән районы Аҫҡар ауылында бер ҡыҙыл-аҡ таҫтамалды фотоға төшөрөп алғандар. Бәлки, ул был төбәккә туй бүләге булараҡ килеп эләккәндер. Күтәреп һуғылған таҫтамалдың ҡыҙыл төҫтәге остарында биҙәк ике рәт буй булып төшкән, ул бер-береһенә инеп торған осло мөйөшлө фигуралараҙан хасил булған. Ҡыҙыл төҫтәге остары өҫтән дә, аҫтан да ике ҡат вертикаль мөйөштәр менән ҡаймаланған. Тығыҙ нескә биҙәк һәм бөхтә генә түшәлеп һалынған булыуы былдай һуғылған орнаменттарҙы хисаплы шыма ҡайыуға оҡшатып тора.



*Ике рәт буй һыҙатлы орнамент (БР, Бөрйән районы, Аҫҡар ауылы). С. Ф. Миржанова фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ХӘҠИҠӘТ БЕР НИСӘҮ БУЛМАЙ,

## йәки Ни өсөн мин тарихи әҫәрҙәргә һаҡсыл ҡараштамын?

**Быйылғы йылды "Башҡорт тарихы йылы" тип иғлан иттеләр. Һөнәре буйынса тарихтан бөтөнләйгә алыҫ торған кешегә лә үткән хәлдәрҙе белергә ынтылыусанлыҡ хастыр ул. Тарихсы булмаһам да, ошо хаҡта бер аҙ фәлсәфәләп алырға булдым әле (табип булараҡ, үҙем фәҡәт "ауырыу тарихы"н яҙыу менән генә булышҡаным бар).**

Тарих тигән төшөнсә, тәү ҡарауға, һис бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгел һымаҡ. Ул - үткән ваҡыт. Борон-борон замандамы ул, ярты-бер быуат тирәһе элекме, хатта былтырғы ғынамы... Халҡыбыҙҙа "Үткән эштән - төш яҡшы" тигән әйтем дә йөрөй. Шуға ҡарамаҫтан, үткән эштәрҙе, йәғни тарихыбыҙҙы мөмкин тиклем тәрәнерәк өйрәнеп, уны хәтерҙә тотоп, ҡасандыр ебәргән хаталарыбыҙ хаҡында фекерләп, киләсәктә ана шул етешһеҙлектәребеҙҙән ҡотолоу сараларын күреп йәшәргә тейешбеҙ, тип һанағандар бер мин генә түгелдер. Тик тарихсыларыбыҙ беҙгә үткәндәрҙе һәр саҡ дөрөҫ кенә итеп еткерһен ине, тигән теләк бар.



Элек, мин мәктәптә уҡыған осорҙа, тарих дәресен бөтә Союз балалары уҡыған программа буйынса ғына үттек. Ә башҡорт халҡының үткәнен башлыса яҙыусыларыбыҙ яҙған хикәйәләр, әҙәби китаптар аша ғына беләй инек (өйҙә ұҙаллы ғына "Башҡорт АССР-ы тарихы" тип аталған китапты уҡығаным бар, әммә ундай айырым дәрес булғанын хәтерләмәйем). Бихисап халыҡты берләштергән СССР тип аталған ғәйәт ҙур бер дәүләттә йәшәнек бит инде. Тарих дәресе дүртенсе синыфтан башланғаны хәтеремдә. "СССР тарихы" тип атала ине ул предмет. Унан киләһе йылына "Боронғо донъя тарихы", артабан - "Урта быуаттар тарихы", бер аҙҙан - "Яңы тарих", хатта "Иң яңы тарих" (Новейшая история) тигән дәрестәр ҙә булды. "Яңы" тигәндәй, һуңғы дәүерҙә сағылдырған өсөн дә уны шулай тип атағандарҙыр. Әммә беҙгәсә алып килеп еткерелгән ҡайһы бер тарихи ваҡиғалар хаҡында уйлана башлаһаң, был һүҙ үткәндәргә өр-яңы күҙлектән сығып, тарихты яңыртып яҙыуҙы күҙ уңында тотҡан һымағыраҡ тойола башлай. Ни өсөн?

Әле һуңғы бер быуат эсендә булған хәлдәрҙе генә алып ҡарайыҡ. Уларҙы төрлөсә баһалау ғына түгел, ана шул осорҙағы күп кенә тарихи ваҡиғаларҙы ҡабаттан яҙып, хатта уларҙы ҡапма-ҡаршы сүрәттә күрһәтеү осраҡтарының шаһиты булдыҡ бит инде беҙ. Бөгөнгө көндә Ҡушма Штаттар, Европа илдәре сәйәсмәндәре тарафынан Бөйөк Ватан һуғышы тарихын (улар уны "Икенсе бөтә донъя һуғышы" йә иһә "Билдәһеҙ һуғыш" тип кенә лә атай), унын асылын ысын мәғәнәһендә үҙгәртергә маташыуҙар хаҡында йыш ҡына һүҙ ҡуҙғатыуҙар тигенгә түгел. Гитлер Германияһын тар-мар итеүҙәге беҙҙең илебеҙҙең төп ролен түбәнәйтергә тырышҡандар күп. Совет ғәскәрҙәре тарафынан ғәйәт ҙур юғалтыуҙар аша фашизмдан азат ителгән күп кенә илдәрҙең (Балтик буйы дәүләттәре, Польша, Көнбайыш Украина) сәйәсмәндәре үҙҙәренең хәҙерге тарихсыларын ана шуға көйләй. Беҙҙе "баҫып алыусылар" тип атарға ла тартынмайҙар. Ҡуйбышев хәрби медицина факультетында уҡыған осорҙа беҙҙең менән әлеге Украинаның көнбайыш райондарынан килгән курсанттар ҙа бар ине. Башҡаларға һауалы ҡарашы, үҙҙәрен "әллә кем" итеп тотоуҙары, хатта һөйләшеүҙәре менән көнсығыш украиндарынан ныҡ айырылып тора ине улар. Был егеттәрҙең тел төбөнән фашистик Германияға ҡарата бер аҙ ғына ихтирам тойғоһо ла һиҙелеп ҡала ине. Һуғыш мәлендә оккупацияланған ерҙәрҙәге немецтар урынлаштырған тәртип уларға оҡшай ҙа ине, буғай... Ҡайһы берәүҙәренең фашистар тарафынан язалап үлтерелгән комсомолка Зоя Космодемьянскаяға кире ҡараште булыуын күреп тә аптырағайным. Йәнәһе лә, урындағы күп кенә кешеләрҙең үлемә немецтарҙың ат һарайын үртәүсе Зоя сәбәпсе булып торған. Шул ҡыҙ арҡаһында тиҫтәләгән ауыл халҡын атып, өйҙәрен яндырып, немецтар тыныс халыҡтан үс алған... Украина, Балтик буйы неофашистарының һуңғы йылдарҙа айырыуса әүҙемлек күрһәтеүе лә уларҙың әлеге хөкүмәтенең быға күҙ йомоп ҡарауынан, хатта ниндәйҙер кимәлдә уларҙы хуплауынандыр ҙа. Тыңлауһыҙ бала һымаҡ, әле булһа "ут менән шаярыуҙарын" ҡуймайҙар. Быны ошо илдәрҙең сәйәсмәндәре Бөйөк Ватан һуғышы хаҡындағы тарихты үҙгәртеп яҙырға, хатта фашистарҙың ҡара эштәрен аҡларға мата-

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ЫҠ БУЙЫ БАШҠОРТТАРЫ

**Ошо көндәрҙә Туймазы ҡалаһында Ыҡ буйы башҡорттары ырыуҙары йыйыны үтте. Ыҡ башҡорттары башҡорт халҡының төньяҡ-көнбайыш төркөмөнә ҡарай. Туймазы районында Әйле, Йылан, Ҡаңлы, Ҡатай, Ҡобау, Ҡырғыҙ, Тамъян ырыуы вәкилдәре йәшәй. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин белдереүенсә, "Ыҡ буйы башҡорт ырыуҙары ниндәйҙер уйлап сығарылған термин түгел. Был - тарихи факт. Үҙ ваҡытында, XV-XVI быуаттарҙа, улар Башҡортостандың көнсығыш райондарынан ошо ерҙәргә күсеп ултыра. Шуға күрә урындағы топонимияла көнсығыш башҡорт ырыуҙарының атамалары осрай".**

Сара сиктәрендә ҡаланың 1-се гимназияһы алдында Рәсәй Федерацияһы Геройы, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы Миңлеғәли Шайморатовҡа бюст асылды. Тантанала урындағы халыҡ, ветерандар, Туймазы районы хакимиәте етәкселәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың вице-спикеры, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова етәкселегендәге рәсми делегация ҡатнашты.

Бюсты асыу хоҡуғы Эльвира Айытҡоловаға һәм Туймазы районының Ветерандар советы рәйесе Нурулла Биксуровҡа бирелде. "Бөгөнгө ваҡиға - ҙур өлгө, - тине үҙенең сығышында Эльвира Ринат ҡыҙы. - Башҡа райондар өсөн өлгө, сөнки белем биреү ойошмаһы территорияһында Герой исемен мәңгеләштереү һәр кемдең дә ҡулынан килмәй. Һеҙ ҙур эш башҡарғанһығыҙ. Был бюсты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иғлан иткән Башҡорт тарихы йылында асыу ҙа оло мәғәнәгә эйә. Ҙур илебеҙҙең, Башҡортостан Республикаһының исемдәре мәңгеләштерелмәгән данлы батырҙары бик күп икәнен беләбеҙ, һәм уларҙың исемен архивтарҙа эшләгәндән һуң мәңгеләштереү зарур. Шулай уҡ һәр райондың, һәр ауылдың ғорурланырлыҡ, улар өлгөһөндә үҫеп килеүсе йәш быуынды тәрбиәләрлек үҙ геройы бар".

Гимназия легендар комдивҡа бюст асыу ғына түгел, унын исемендәге музей ҙа ойошторған. Белем биреү учреждениеһы директоры Румиль Әйүпов белдереүенсә, улар Хәтер вахтаһы булдырған һәм эҙәрмәндәр отрядтары менән бергә шайморатовсылар алышҡан урындарға сыға. Музейҙа ошо экспедициялар барышында табылған экспонаттар ҙа урын алған. Гимназияла ойоштороl-

ЙӨРӘК ҺҮҘЕМ

# ТАРИХТЫҢ УТЛЫ МӨҺӨРӨ




**Бөйөк байрамды ҡаршылап, ошо уңайҙан билдәле шағирә һәм журналист, Ш. Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты Зөһрә Ҡотлогилдинаның "Һуғыш балалары - тарих яралары", "Һуғыш яралаған бала саҡ", "Һуғыш балалары һөйләй" китаптар серияһы нисек барлыҡҡа килеү тарихы менән танышайыҡ.**

Был эшкә тотоноуыма билдәле белорус яҙыусыһы Светлана Алексиевичтың "Һуғыш йөҙө ҡатын-ҡыҙмы?" һәм "Һуңғы шаһиттар" тигән документаль китаптары этәргес булды. Автор фашистарҙың тәүге һөжүмен ҡабул иткән Белоруссия ерендә йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың, балаларҙың иҫтәлектәрен магнитофон таҫмаларына яҙып алып баҫтырғайны. Уларҙың һуғышты нисек итеп иҫендә ҡалдырыуы тураһындағы юлдарҙы тыныс уҡыу мөмкин түгел ине.

"Ә тылда еңел булғанмы ни?" Китаптарҙы уҡып сыҡҡандан һуң шундай тәүге һорау тыуҙы. Һәм мин иң башта үҙебеҙҙең Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылы инәйҙәренең, апайҙарының иҫтәлектәрен яҙып алдым. Үкенескә күрә, уларҙың бөтәһе лә тиерлек хәҙер мәрхүмә инде. Тора-бара ошо иҫтәлектәргә Башҡортостандың өс тиҫтәгә яҡын район-ҡалаларында, хатта сит төбәктәрҙә йәшәүсе инәйҙәрҙең хәтирәләре лә өҫтәлде. Уларҙың бер өлөшөн Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығы уңайынан "Башҡортостан" гәзите лә баҫтырып сығарҙы. Ун дүрт һанда донъя күргән яҙмалар уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Башҡортостан радиоһынан тапшырыу ойошторолдо. Шуларҙы уҡып, тыңлап, тыл ветерандары үҙҙәре мине эҙләп килә, хаттар ебәрә башланы. "Беҙгә оҡшаса әллә ни иғтибар булманы", - тип үпкәләрен дә белдерҙе. Шуныһы ҡыуаныслы: хәҙер килеп уларҙы һуғыш ветерандарына тиңләнеләр. Бындай хөрмәткә күптән лайыҡ ине тыл хеҙмәткәрҙәре. Бөйөк Еңеү өсөн үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, һуңғы ризыҡтарын фронтҡа ебәреп, аслыҡтан үлеүселәр аҙ булғанмы ни? Станок артына баҫҡан, тракторға ултырған, урман ҡыҫҡан, шахтаға төшкән, госпиталдәрҙә алһыҙ-ялһыҙ эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар күпме ауырлыҡ, михнәт, мохтажлыҡ кисергән. Бик күп ҡорбандар менән яуланды был Бөйөк Еңеү.

"Һуғыш йылдарында республика хеҙмәтсәндәре фронтҡа шундай-шундай ярҙам күрһәтте", - тигән һандар, фактттар килтерелгән тарихи, документаль хеҙмәттәр яҙылған. Әҙәби әҫәрҙәр ижад ителгән. Ә бына айырым кешеләрҙең нисек йәшәүе, фиҙаҡәр хеҙмәте, фронтҡа ярҙам итеүҙәрен һөйләүсе иҫтәлектәрҙең тәьҫире бөтөнләй башҡаса. Мин төҙөгән йыйынтыҡҡа Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына 65 тыл ветеранының хәтирәләре индерелде. Был яҙмаларҙа - күпме күҙ йәше, һыҙланыу, йөрәк әрнеүҙәре, ҡайғы-хәсрәт. Уларҙың һөйләгәндәренән ғаилә фажиғәләре йылъяҙмаһы күҙ алдына килеп баҫа. Дүрт йыл буйына барған һуғыштың алғы һыҙығы ҡаҡшамаһын өсөн тылдағы көндәлек ҡаһарманлыҡтар сағылдырыла унда. Көндө төнгә ялғап эшләгән апай-инәйҙәребеҙ әле лә баҫалҡы ғына ғүмер кисерә, барына риза булып, шөкөр итеп көн күрә. "Беҙҙең һуғыш ваҡытында күргәндәр менән сағыштырғанда бөгөнгө уйлап сығарылған көрсөк тигәндәре нимә ул! Иң мөһиме, тыныслыҡ булһын, табындарҙан икмәк өҙөлмәһен, яндарығыҙҙа ғәзиз кешеләр булһын. Шуларҙың ҡәҙерен белегеҙ", - ти улар.

Егерме һигеҙ йәшендә генә гүр эйәһе булған, аңлы тормошомда бер тапҡыр ҙа "атай" һүҙен әйтмәгән атайыма, егерме биш йәшендә генә тол ҡалып, үҙе аяҡһыҙ ҡалһа ла, ике ҡыҙын сирле килеш яңғыҙ аяҡҡа баҫтырған әсәйемә, бик күп тол ҡатындарға, етем балаларға, ҡаһарман тыл ветерандарына, уларҙың ҡаҡшамаҫ рухтарына бер йәдкәр булһын ошо йыйынтыҡҡа тупланған яҙмаларым. Икенсе донъя һуғышында Ер йөҙөндә ун өс миллиондан ашыу бала һәләк булған, тиҙәр. Йәшәй башламаҫ борон яҡты донъя менән хушлашҡан, уларҙан тыуасаҡ сабыйҙар ғүмеренә балта сабылған, тамырҙары ҡоротолған. Бөтә ҡорбандар рухына изге аят булып яңғыраһын был иҫтәлектәр. Ерҙә һуңғы һалдат йәшәгәнгә тиклем, атай-олатайҙарын юғалтҡан һуңғы бала, ейән йәшәгәнгәсә һыҙлаясаҡ ул һуғыш яраһы. Аҙаҡ тарихтың мәңгелек утлы мөһөрө булып ҡаласаҡ.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Яҙыусының ошо китаптарынан ҡайһы бер сығыштарҙы "Һуғыш балалары һөйләй" тигән рубрикала уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Кемдәрҙеңдер ошондай хәтирәләре булһа, беҙгә яҙып ебәрә алаһығыҙ.**

ҺУҒЫШ БАЛАЛАРЫ ҺӨЙЛӘЙ

## СТАЛИНГРАДТА



***Фәрихә ҠОҘАҠАЕВА, Ҡырмыҫҡалы районының Атйетәр ауылынан:*** Сталинград янында немецтарҙы ҡыйраткандан һуң, Советтар Союзының оккупацияға алынған ерҙәрен азат иткәс, илебеҙ алдында һуғыш ваҡытында емерелгән халыҡ хужалығын тергеҙеү мәсьәләһе ҡуйыла. 1943 йылдың 30 апрелендә ВЛКСМ Үҙәк Комитеты "Сталинград ҡалаһының предприятиеларын тергеҙеү буйынса комсомол шефлығы тураһында" тигән махсус ҡарар ҡабул итә. ВЛКСМ Үҙәк Комитетының саҡырыуы буйынса күп комсомолецтар һәм йәш эшселәр ауыр шарттарҙа Сталинградты емереклектәрҙән аяҡҡа баҫтырырға китә.

Башҡортостанда ла май башында үҙҙәре теләп китеүселәрҙе йыя башланылар. Улар араһында мин дә бар инем. Миңә 17 йәш ине. Өйҙән 1943 йылдың 15 майында сығып киттем. Кешеләр йыйылғансы, бер нисә көн тимер юлы вокзалында көтөп яттыҡ. Эшелонға таҡталар, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым һәм тәү сиратта иң кәрәк була торған әйберҙәрҙе тейәнеләр.

Беҙгә: "Һинең өҫкә ҙур бурыс йөкмәтелде. Комсомол һеҙгә немецтар тарафынан ҡыйратылып, көлгә ҡалған ҡаланы күтәреү эшен тапшырҙы",- тип яҙылған ҡағыҙ таратып сыҡтылар. Сталинградҡа 23 майҙа килеп төштөк. Ҡала тулыһынса емерелгәйне. Беҙҙе төрлө объекттарға тараттылар. Мине Сталинград трактор заводына ебәрҙеләр. Немецтар заводҡа һәм яҡын-тирә биләмәлә тотошлайы менән миналар ҡуйып сыҡҡан ине. Һалдаттарҙың уларҙы хәүефһеҙләндергәндәрен көттөк. Шунан һуң ғына эш башланыҡ. Заводты тергеҙеп, конвейерҙар ҡуйҙыҡ. Мотор цехында 4-се разрядлы слесарь-монтажник булып эшләнем. Хәрби техника әҙерләнек. Фронтҡа хәрби техника ебәреүсе иң төп заводтарҙың береһе ине ул. Тәүлегенә 14-16-шар сәғәт эшләнек. Ауыр булды. Арыттыра ине. Ҡайны сакта хатта цехта йоҡларға ҡалабыҙ. Николай Петрович Коломец тигән кеше прораб булды. Беҙҙең йәштәрҙәге Софья исемле ҡыҙы сваркала эшләне.

Еңеү булғас та ҡайтманыҡ әле. Тағы ла ике йыл эшләнек. 1947 йылдың 16 мартында ғына тыуған яҡтарға ҡайттыҡ. Дүрт йыл Сталинградта булып, ВЛКСМ-дың Үҙәк Комитеты йөкмәткән бурысты намыҫ менән үтәнек.

## ЙЫЛАН АЯҒЫН КҮРҺӘТТЕ



***Зөлфиә СӘЙФУЛЛИНА-ӘСӘҘУЛЛИНА, Ауырғазы районының Үтәймулла ауылынан:*** Бала сағым бик күп ауырлыҡтар кисереп, етемлектә, кешелә аҫрау булып тамаҡ хаҡына эшләп, аслыҡ-ялангаслыҡта үтте. Хәҙер уйлап торам да уйҙарымдан уйылам: Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән һикһән туғыҙ йәшкә етерлек көс-ҡөҙрәт табылғандыр, тим, шөкөр итәм.

Өс йәшем тулыр-тулмаҫтан әсәйем ҡаты сирләп, гүр эйәһе булғайны. Төштәгеләй генә хәтерләйем ул саҡтарҙы. Әсәйем үлгәс, үгәй әсәй килде. Дүрт ҡыҙ баланың иң кесеһе - сәнгелдәктә ятҡаны, йүнле ҡарамағанлыҡтан, үлеп ҡалды. Әсәйем иҫән саҡта нисек тә беҙҙең тамаҡҡа хәстәрләп, юҡты бар итеп, аслыҡтан үлтермәҫкә тырышты. Үгәй әсәйгә беҙ бар ни ҙә, юҡ ни... Минән алты йәшкә һәм өс йәшкә өлкән апайҙарым хәллерәк кешеләрҙә эшләп, аҙ-маҙ ризыҡ - икмәк ҡатыһымы, ваҡ ҡына бәрәнгеме - алып ҡайтып ашатырға тырышҡан була торғайны. Үҙем дә үҫә килә уларға эйәреп йөрөп йылға буйында ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, ҡуян тубырсығы эҙләп табып ашарға өйрәндем. Атайым көндөҙ өйҙә юҡ, унының менән иркенләп һөйләшеп тә, уға зарланып та булмай - үгәй әсәй ныҡ асыулана ине.

1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ыҙа сигеүҙәрҙең иге лә сиге лә булманы. Колхозда эшкә ярарлыҡ, ҡорал тота алырлыҡ ир-аттарҙы берәм-берәм һуғышҡа алдылар. Атайымдың йәше оло ине, ул Беренсе бөтә донъя һуғышында ҡатнашҡан. Әле Троицкиға хеҙмәт армияһына әләкте. Шунда 1943 йылда, үҙе эштә саҡта атайымдың фанер сумаҙанын ватып, ун һигеҙ көнлөк икмәк карточкаһын урлағандар. Ас килеш оҙаҡ эшләй алмай, аслыҡтан шешенеп, ауырып ҡайтып, донъя йәшеллеккә, сәскәгә күмелгән май айында вафат булды.

Оло апайымды торф сығарырға вербовать иттеләр. Миңә һуғыш сыҡҡан йылды ун йәш тулғайны. Йәй көнө көсө-көскә тейгәнерәктәрҙе баҫыу утарға йөрөтә башланылар. Уртансы апайым менән бергәләп утауға йөрөйбөҙ. Тамаҡ ас, хәл юҡ, сүпте йолҡорға кәрәк. Өйҙә ашарға юҡ. Һуғыш башланғансы үгәй инәйҙең дүрт улы тыуғайны. Артыҡ тамаҡтар уға кәрәкмәй.

Колхоз рәйесе булып эшләгән Әбүбәкер ағайҙың ҡатыны Факиһа апай колхоз өсөн икмәк бешерә ине, мине уға ярҙамсы итеп тәғәйенләнеләр. Хужалыҡтарында башҡа эштәрҙе лә башҡарып, уларҙа йәшәй башлағас, күҙҙәрем асылғандай булды.

Мөрйә башына бүленгән 50 сутый ерҙе лә ҡаҙыйбыҙ. Бер мәл ер ҡаҙып йөрөһәм, ағас төбөнәнерәк көрәгем менән күтәргән ерҙән ҡаҫ өҫтөнә ярты метр самаһы оҙонлоҡтағы йылан килеп төштө. Төшкән ыңғайы башынан ус аяһылай урындан ике йөнтәҫ аяғын йәйеп ебәрҙе. Ҡурҡышымдан сарылдап ҡысҡырҙым да ул урындан йүгереп китә һалдым. Хужаларҙың улы менән бергә ер ҡаҙый инек. Уның менән килеп ҡарағанда йылан күренмәй ине, ул ышанмаһы, күҙенә күренгәндер, тине. Һуңынан һөйләһәм, йә ышанмайҙар, йә кеҫәртке булғандыр, тиҙәр. Ә ололарҙан бер нисәүһе, бәхетле булырһың, йылан аяғын бик һирәктәргә генә күрһәтә ул, тинеләр. Үҙемде бәхетһеҙгә һанамайым: күпме тапҡыр үлемдән ҡалдым, етемлектә үҫһәм дә, бына тигән итеп туй яһап кейәүгә сыҡтым, (оло апайым Мәрйәмгә рәхмәт, ул ныҡ ярҙам итте), итәк тултырып балалар үҫтерҙем, тәүҙә Өфөлә ағас эшкәртеү комбинатында, тормошланғас, колхозда сөгөлдөр үҫтерҙем, төрлө эштәрҙә лә эшләнем.

Бесән өлгөргәс, беҙ, үҫмерҙәр, кипкән бесәнде йыябыҙ, ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар күбәләргә һала. Ураҡ мәлендә ауылдағы бала-сағалар менән йәш үҫмерҙәрҙе борсаҡ йолҡорға сығаралар, йолҡоп, күтәремдәргә һалабыҙ. Ергә ҡойолғандарын сүпләп ашайбыҙ. 1943 - 1944 йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар менән көлтә бәйләргә өйрәнек. Алты көлтәне бергә ултыртып, етенсеһен өҫтән һалып ҡуя инек, уны "мәрйәбаш" тип атай торғайныҡ.

Михнәттәрҙе күп күрелде, түҙелде, еңеү көнөн яҡынайтмаҡсы булып, һәр эшләгән эште тырышып башҡарам, аслыҡтан башым әйләнеп, күҙ алдарым ҡараңғыланып йығылған саҡтар ҙа булды. Кистәрен апайҙар, әбейҙәр менән башалтай-бейәләйҙәр бәйләп, фронтҡа посылкалар әҙерләйбеҙ... Эй-й-й, хәҙер уйлап ултырам да уйҙарымдан осона сыға алмайым - йәштәргә ундай һуғыштарҙы, аслыҡтарҙы күрергә яҙмаһын, тим. Батшаларҙың күнелдәренә миһырбанлыҡ һалһын Хоҙай Тәғәлә, донъялар имен торһон. Ниндәй замандарҙы күреп йәшәйбеҙ - аптырарлыҡ! Элекке кеүек оҙон-оҙон хаттар яҙышыу ҙа юҡ, йәштәр телефон менән төрлө мәсьәләләрҙе тиҙ генә хәл итә лә ҡуя. Шул хәтлем ауырлыҡтар күреп тә ошондай матур тормошта йәшәп ятыуҙарыма ҡыуанып бөтә алмайым.

✓ Сталинградты азат иткәс, Фатима апайымды үҙе кеүек йәштәр менән бергә ҡаланы тергеҙергә тип шунда ебәрҙеләр. 3,5 йыл булды унда. 1943 йылда киткәйне, 1947 йылда ғына ҡайтты. Төҙөлөштә лә эшләгән.



# ӘРЕМ АШАП ҠОТОЛДОҠ



***Лотфулла МУСИН, Күгәрсен районының Ялсы ауылынан:*** Атайымды 1942 йыл ғинуар тирәһендә һуғышҡа алдылар. Әсәйем, бахыр, Алкинға тиклем барып ҡайтты. Һуғышҡа өйрәнеп яталар, тине. Әсәйем Разия менән биш бала тороп ҡалдыҡ. Иң ҙуры Фатима апайым, ул 1926 йылғы ине. Шунан - мин. Хәтимә һылыуым 1938 йылғы. Ике бәләкәс туғаныбыҙ - Таһир менән Зәйтүнә йәй көнө астан үлде. Ашарға юҡ. Ауырыу күбәйҙе. Ҡәберҙе беҙҙең кеүек йәштәр ҡаҙҙы. Икеһен бер тирәлә күмдек.

Атайым грамотный булмаһа, урыҫ кешеһенән бер хат яҙҙырған. "Ранен булдым, госпиталдә ятам", - тигәненән башҡа хәбәр килмәне. "Ҡара ҡағыҙ" алдыҡ. Тышта үләндә аунаҡлап ятып иланыҡ.

Әсәй эшләне, үгеҙ егеп һабанда йөрөнө. Мин өс класс ярым уҡыным да, әсҡә кейергә булмағас, дүртенсе кластың ғинуарында ташланым.

Ҡар аҫтында ҡалған игенде яҙ, ер һөрөргә кәрәк булғас, уртәнеләр. Халыҡ шундағы игенде барып йыйып ашап, күптәр ағыуланып үлде.

Тәнгә ҡап-ҡара миң сыға ине. Ул тапты әсбе тиҙәр ине. 1943 йыл Йомағужанан килеп, врачтар Вәлит ауылында больница астылар. Кеше күп үлде. Көн һайын үлделәр. Ә беҙгә әсәйебеҙ ҡатыҡҡа әрем һалып ашатты. Күҙҙе лә асып булмай, әсе. "Атыу үләһегеҙ", - тип әсәй көсләп ашатты. Шуның менән тороп ҡалдыҡ.

Үгеҙ етәкләп, һабан һөрөп йөрөгәндә ҡурылған ашлыҡты ашаныҡ. Иген йыйылмайынса күп ятып ҡалғайны.

Сталинградты азат иткәс, Фатима апайымды үҙе кеүек йәштәр менән бергә ҡаланы тергеҙергә тип шунда ебәрҙеләр. Башта үлектәрҙе йыйып йөрөгәндәр. 3,5 йыл булды унда. 1943 йылда киткәйне, 1947 йылда ғына ҡайтты. Төҙөлөштә лә эшләгән. Йөрәк ауырыулы булып ҡайтты. Ҡасып ҡайтҡанһың, тип ай буйына КПЗ-ла ултырттылар. Больницала тикшерелеп, ҡотолоп ҡалды.

Беҙ ауылда ат етешмәгәс, күберәк үгеҙ менән ер һөрҙөк. Эшләгән өсөн көҙ 50-60 килограмм иген бирәләр. Һыйырыбыҙ, кәзәбеҙ булды. Һыйыр быҙаулағансы асыға торғайныҡ. Муйыл өлгөрһә, туғайҙан күп итеп йыйып ҡалырға тырышам. Серек картуф йыйып ашаныҡ. Ер өҫтөндә ап-аҡ булып ята. Әсәй уны икмәк һымаҡ итеп бешерә. Кетерләп тора. Тәмле була ине. Ул эләкһә, алабутаң ары торһон.

Сабата үрергә өйрәнә алмай бер булдым. Ҡурыс алып ҡайтып үрәм, аҙна-ун көндән тишелеп сыға.

Фронтҡа тип шешәләр ҙә йыйҙырталар ине.

Көл аша туғайҙан балтырған йыйҙыҡ. Түштән ысыҡ кисеп, иртүк китәбеҙ. Иртән бармаһаң, ҡалмай. Күрше ауылдарҙан ат менән килеп йыйып алалар ине.

Ҡыш молотьба баҫабыҙ. Игенде һуғып үткәрәләр. Мин шунан сыҡҡан һаламды тарта инем. Бер күбә булһа, ат менән ышырып алып китәм. Уны ҡышҡылыҡҡа малға эҫкерткә өйәләр.

Көҙ ауылда эш бөтһә, ҙурыраҡтарҙы Ырғыҙлыға урман ҡырҡырға йөрөттөләр.

Һуғышҡа бармаған ҡарттарҙы ла, ҡатындарҙы ла ебәрҙеләр. Тәүҙә ҡырҡалар, аҙаҡ шул бүрәнәләрҙе Иҙелгә төшөрәләр.

...Һуғыш бөткән көндө Бесәнсе юлында үгеҙҙәр менән ер һөрөп йөрөй инек. Үгеҙҙәрҙе дворға илтһәк, ҡыҙыл флаг эленгән. Өйгә ҡайтмайынса белмәнек.

- Иҫән ҡалғандар ҡайтыр инде, беҙҙеке - юҡ, - тип әсәй илап ултыра ине.

Ул көндө һәр өйгә бер туҡмаслыҡ бөрәр ус он биргәндәр. Әсәй шуны бешереп ашатты. Быға тиклем гел балтырған да алабута ашай инек. Тәүгә аш ашаныҡ...

# УН ЙӘШТӘ ГЕНӘ ИНЕМ...



***Нәжип ӘСӘҘУЛЛИН, Ауырғазы районының Үтәймулла ауылынан:*** Ауыл советы рәйесе булып эшләгән атайымды һуғышҡа алдылар. Өйҙә әсәйем ҡарамағында өс бала - минә 10 йәш, һеңләмә - 4, ҡустыма 2 йәш, дүртенсеһе тыуырға тейеш. Ике ҡустым һуғышҡа тиклем ҡорһаҡ тифынан вафат булды.

Ғаиләлә иң өлкәне мин, әсәйемден уң ҡулы, атайым әйтмешләй. Шул йылды йәй ауылда көсө етерҙәй балаларҙы йыйып, колхоз баҫыуына утауға йөрөтә башланылар. Арыш, бойҙай, тары, борсаҡ баҫыуҙарына йөрөнөк.

Өй башына илле сутый ер бирәләр, шуны кәрәк менән ҡаҙыйһың да, муйынға махсус әҙерләнгән тоҡсай аҫып, иген сәсәһең. Унең ике яҡтан ҡул һыймалы тишеге бар. Эстәге орлоҡто ике ҡулды ла тығып алаһың да, һелтәнә-һелтәнә сәсәһең. Шундай уҡ эште август айында ла башҡара торғайныҡ, унда ужым арышы сәсәбеҙ. Һуңынан ҡул тырмаһы менән тырматып сығабыҙ. Ошо рәүешле сәселгән иген бер йылды яҡшы уңыш биргәйне.

Һуғыш ваҡытында иртүк эшкә барғанда, төнөн һуң ғына эштән ҡайтҡанда буш торған өйҙәр эргәһенән үтергә шөрләтә ине. Тәҙрәнән гел генә ут күренә, ололар уны "убыр уты" яна, ти торғайны. Бер ваҡыт иртәрәк ҡайтҡайным, энерҙә тауыш ҡупты. Зайнатып гармун уйнайҙар, аттар бышҡыра, һыйырҙар мөңрәй, балалар илаша. Сиған таборы уҙып барамы икән, тим. Тәҙрәнән ҡараһам - бер ни ҙә күренмәй. Инәйем, ҡуй, ҡарама, ендәр күсенеп китеп бара бит, ти.

Ураҡ ваҡытында борсаҡ баҫыуына борсаҡ йолҡорға йөрөттөләр. Борсаҡты йолҡоп, бәләкәйерәк күтәремдәргә һалабыҙ, ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар үгеҙ егелгән фурманға күтәремдәрҙе һәнәк менән тейәй ҙә, ҙурыраҡ малайҙар уларҙы ырҙын табағына алып барып бушата.

Эш нисек кенә ауыр булмаһын, риза булабыҙ, ергә ҡойолған борсаҡты сүпләп ауыҙға оҙатабыҙ, тамаҡ ялғанып китә. Хеҙмәт армияһынан Муллағәле, Ғәлим бабайҙар ҡайтҡас, еңелерәк булып ҡалды. Колхозда ниндәй генә эш ҡушһалар ҙа, баш тартманым. Өйҙә ашарға ҡатыҡ ҡына, күмәкбеҙ, ә колхозда эшләгәндә итле аш та эләгә. Бесән сабырға ла йөрөнөм, кипкәс, йыйып күбәләй торғайныҡ. Ҡыш урманға сыбыҡ-сабыҡ алып ҡайтырға сана һөйрәп барған булабыҙ. Урмансы Ризуан бабай күҙәтеп кенә тора ла, саналарыбыҙҙы ватып, балталарҙы алып ҡала ине. Яҙға табан баҫыуҙарҙы ашлау өсөн ҡыш буйы йыйылған көлдө шаҙралана башлаған ҡар өҫтөнә һибергә сығаралар. Бата-сума йөрөйбөҙ, сабаталар "мыйыҡ"лана, уларға ҡар тула. Еүешләнеп, өшөп бөтәбеҙ. Бер көндө "Бетлекәй" баҫыуына көл һиптек тә инде ҡайтырға сығабыҙ тип торғанда, урмандан шыя килеп төштө, юлды буыҙы. Көн арыу ғына йылы булғайны шул. Бер-беребеҙгә тотоноп, көс-хәл менән малайҙар ҡыҙҙарҙы ҡурсалаған булып, был ҡарлы-боҙло йылғаны ла кистек.

1943 йылда хеҙмәт армияһынан ҡайтҡан Шәриф бабай менән янғын һүндереүсе булып эшләнем. Йәй көнө Трәпә тигән сыуаш ауылында өй янып китте. Беҙ иң тәүгеһе булып барып еттек, утты һүндерҙек. Һуңынан район үҙәге Талбазыға саҡырып алып, Янғын һүндереүселәр начальнигы Никитин бабай рәхмәт әйтте, иң йәш янғын һүндереүсенең юғалып ҡалмауы арҡаһында ут таралманы, тине. Бүтәндәрҙе һүлпәнлектә ғәйепләне. Шул йылды Мөхәмәтҡол ағай һуғыштан яраланып, госпиталдә дауалангас, ауылға ҡайтты. Ул фронтта партияға ингән - коммунист булған. Ураҡ осоронда ямғырҙар йыш яуҙы. Мөхәмәтҡол ағайҙы иген киптереү буйынса етәксе итеп ҡуйҙылар. Бер нисә үҫмер егет уға ярҙамсы итеп тәғәйенләнде. Улар араһында мин дә бар. Көнө-төнө эшләнек сушилкала, бабайҙан һуғыш тураһында һөйләтәбеҙ, тиҙерәк ҙур үҫеп үҙемдең дә фашистарҙы ҡыйратҡы килә ине.

1944 йылда ураҡ ваҡытында үҙебеҙҙең аҡ үгеҙҙе егеп, баҫыуҙан иген көлтәләрен ырҙын табағына ташыным. Ярты төн ауышҡансы эшләйбеҙ. Бер мәл йоҡлап киткәнмен дә үгеҙ үҙебеҙҙең ҡапҡа алдына ҡайтып туҡтаған. Әсәйем иртән тышҡа сыҡҡас, ҡото осҡан: ул осорҙа бер ус игенде кеҫәһенә һалып алып ҡайтыусыларҙы ла төрмәгә ултырталар ине. Көнсәләр күршелә генә. Һуңынан ишетеүебеҙсә, ауыл советы тәҙрәһенән, былар ни эшләрҙәр икән, тип, күҙәтеп торғандар. Әсәйем үгеҙҙе бороп, беҙҙе ырҙын табағына ебәрҙе.

Шул уҡ йылды ҡышын ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар менән мине (әсәйем урынына), Белорет урманына ағас ҡырҡырға ебәрҙеләр. Тағы минән ҙурыраҡ бер малай бар ине, өҫтөбөҙгә ағас ауып ҡуйыуҙан ҡурҡып, икебеҙҙе ағас ботаусы итеп тәғәйенләнеләр.

Малай ғына саҡтан ауыр эштәрҙе, теш ҡыҫып, ныҡлы сыҙамлылыҡ менән, өлкәндәр менән бергә атҡарып сығылды. Беҙҙең был ныҡышмалылыҡ Бөйөк Еңеүебеҙ хаҡына көсөбөҙҙән килгән тиклем үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тырышыу ине.

# ШӘЛ БӘЙЛӘНЕК...



***Гөльямал НОҒОМАНОВА- МӘҠСУТОВА, Көйөргәҙе районының Ҡунаҡбай ауылынан:*** Атайыбыҙ инвалид ине. Шулай булһа ла, хеҙмәт армияһына алып киттеләр. Унда ике-өс йыл булды. Әсәйебеҙ Сәғиҙә "Золотой колос" колхозында эшләне. Һуғыш башланғанда беҙ ете бала инек. Иң өлкәне Шәмсурый апайыбыҙға ун биш-ун алты йәш тирәһе булғандыр, уны Өфөгә күмәк ҡыҙҙар менән бергә алып киттеләр. Моторҙар төҙөү заводында эшләгән. Бик ауыр булғандыр, ҡасып ҡайттылар. Йонсоп, ябығып бөткәйне. Мунса инеп, өйҙә бер төн йоҡлау менән тағы алып киттеләр. Ашатырға ла, биреп ебәрергә лә бер нәмә лә юҡ. Ике-өс йылдан, һуғыш бөткәс кенә ҡайтты.

Гөлйөҙөм апай ун дүрт йәш тирәһендә ине, колхозда эшләне. Апайым көлтә бәйләй, мин уға ярҙам итеп йөрөйөм, ҡамыштан үреп бау яһайым, шуны апайыма бирәм. Бер көн эшкә сыҡһаң, таяҡ ҡуялар. Бер таяҡҡа - 10 тинме, 12 тинме аҡса бирәләр. Шул аҡсаға ҡарап, аҙаҡ ашлыҡ тараталар.

Кәзәләребеҙ бар ине. Мамығынан шәл бәйләйбеҙ. Күмәкләшеп кис ултырабыҙ. Бөрәү иләй, икенсебеҙ тетә, өсөнсөбөҙ көләбәне мамыҡҡа ҡушып сирата. Шәл бәйләйбеҙ ҙә Молокан, Отрада, Секан тигән урыҫ ауылдарына алып барып һатып, картуфка, онға алыштырып ҡайтабыҙ. Колхоз эшенән бушаған арала әсәй менән малға бесән әҙерләйбеҙ. Ураҡ менән урабыҙ.

Кәрәсин юҡ. Һуҡыр лампа. Бишле, етеле ҡыуыҡтары була торғайны. Шешәгә мамыҡмы, филтәме тығабыҙ ҙа шуны яндырабыҙ.

Өс кәзәбеҙ, бер һыйырыбыҙ бар ине. Хөкүмәткә һөтөн, майын ваҡытында тапшырмаһаң, сепараттың әйләндергесен алып китәләр. Ҡуйы һөттө эсә алманыҡ. Үҙебеҙгә айыртылғаны ғына ҡала. Унан ҡатыҡ ойотоп эсәбеҙ. Йәй елек ваҡытында ярты сеүәтә ҡатыҡҡа елек һалып эсәбеҙ ҙә, бер аҙға тамаҡ туя.

Урыҫтарҙың баҡсаһына серек картуф ҡаҙырға барабыҙ. Улар ҡаҙытмай, ҡыуа. Ярты биҙрәләй йыйһаҡ, бик шәп инде. Яҙ балтырған, кесерткән ашайбыҙ. Ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы йыябыҙ. Төшкә хәтле ярты тоҡ алып ҡайтабыҙ ҙа әрсеп ашайбыҙ, шунан төштән һуң тағы китәбеҙ. Ҡуҙғалаҡ, йыуа, ҡаҡы күп була ине. Көпшә лә ашайбыҙ.

Утауға йөрөгәндә ҡуян тубығын йыябыҙ. Иген араһында ҙур булып үҫә. Тәүҙә осон, ҡатмаған ерен ашайбыҙ, шунан төбөн йолҡоп алабыҙ.

Үҙебеҙ сөгөлдөр сәсә инек. Япрағы күренеү менән йолҡоп алып ашай башлайбыҙ. Аҙаҡ төбөн ҡышҡылыҡҡа өйгә һалып ҡуябыҙ. Ҡабаҡ та үҫтерәбеҙ. Ҡыш шуларҙы ашайбыҙ. Ашлыҡ өлгөрһә, арыш башағына барабыҙ. Күреп ҡалһалар, ҡыуалар. Йыйырға рөхсәт итмәйҙәр. Әммә ныҡ асыҡҡас, беҙ урларға мәжбүр булабыҙ.

Көҙ ҡайны ваҡыт сабылмай ҡалған ашлыҡ була. Икенсегә сәсергә ер кәрәккәс, ут төртәләр.Эҫкерткә өйөп ҡуйылған игенде ҡыш һуғып алалар. Яҙ сыҡҡан иген ағыулы була. Шуны ашап, күп кеше үлде. Эҫкерт урынында ҡалған һаламды алып ҡайтып, өйгә лә яға торғайныҡ.

...Саҡ ҡына ер асыла башлаһа, ап-аҡ ҡарҙа яланаяҡ уйнай башлайбыҙ. Сүрәкә тигән уйын була ине. Тупты һыйыр йөнөнән йомғаҡ итеп яһап алабыҙ. Күрше Яҡшымбәт ауылы малайҙары йомран тота. Шуны бешереп ашайҙар. Минән өс йәшкә өлкән Әхмәҙи һөйләүенсә, үлгән кешеләрҙе мәсеткә йыя торған булғандар. Ҡәбер ҡаҙыусы ла, күмергә әйбер ҙә юҡ, ти, шуға бер нисәһен бергә күмгәндәр.

...Ауылда бер-ике кешелә генә мунса бар. Әсәй алдан һорап ҡуя ла яға. Көлдө тондороп, шуның һыуына баштарыбыҙҙы йыуа. Тараҡан, ҡандала, бөрсә күп була ине. Мунса йыраҡ, бәләкәйҙәрҙе әсәй ат менән алып бара. Минән һуң да әле Һиҙиәтулла, Хәсән, Фәрит исемле туғандарым, Шәмсихаят тигән апайым да бар ине. Аяҡҡа ла, өҫкә лә кейергә йүнле кейем булмағас, әсәйебеҙ әйбергә урап алып бара торғайны.

Өҫтөбөҙҙә ниндәй кейем бар, шуның менән ятып йоҡлайбыҙ. Толоп менән тун бар ине, шуларҙы ябынып ятабыҙ. Аҫта - балаҫ.

Кейергә әйбер булмағанғамы икән, мин гел өшөй инем, шуға мейес башында ултыра торғайным. Ниңәләр гел тешем һыҙланы.

...Уҡытыусы абыйҙы армияға алып киттеләр. Унең урынына Шәфиға исемле апаны алып килделәр. Бер нисә кешегә бер китап, һәр беребеҙгә яртышар дәфтәр таратып бирҙеләр.

Мәктәпкә ягыр өсөн дә утын әҙерләтәләр.

Дүрт класс ҡына тамамланым. Молоканға бишенсе класҡа барғайным, көҙ, һыуыҡтар башланғас, өҫкә кейергә кейем булмағас, уҡымайса ҡалдым. Атайыбыҙ хеҙмәт армияһынан иҫән-һау ҡайтты. Һуғыштан һуң тағы ла Рәхимә, Миңлеғәли, Ғилметдин исемле туғандарыбыҙ тыуҙы. Ун бала, үҙҙәре менән ун ике йәнгә һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа ла көн итеүе еңел булманы.

***✓ Бүләктәрҙең бөтәһендә лә халыҡтың көсө һәм ҡайнар мөхәббәте бар. Бында иң ҡәҙерле ҡунаҡтарға ғына йәки туйҙарҙа ғына бешерелә торған бауырһаҡтан алып, Башҡортостан ҡырҙарында бешкән еләк ҡағына тиклем бар.***



**Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға, совет халҡының фашистик Германия илбаҫарҙарын тар-мар итеп, Еңеү яулауына 76 йыл тула быйыл. Ошо иҫ китмәле, ҡан ҡойошло һуғыш хаҡында том-том китаптар нәшер ителгән, әҙәби әҫәрҙәр яҙылған, кинофильмдар төшөрөлгән. Йылдар үткән һайын кеше хәтере тоноҡлана бара - әммә ошо данлы үә шанлы йылдар халыҡ хәтеренән мәңге юйылмаясаҡ. Шулай ҙа башҡорт халҡының, Башҡортостан халыҡтарының ошо оло Ватан яуында ҡатнашыуы хаҡында үҙ ваҡытында гәзит-журналдарҙа, китаптарҙа баҫылған мәғлүмәттәрҙе ҡайтанан хәҙерге быуындарға еткереү үтә лә сауаплы булыр, тибеҙ. Халҡыбыҙҙа был хәтер яңыртыу, тип атала. 1943 йылда Өфө ҡалаһының "Башгосиздат" китап нәшриәтендә "Башҡорт атлылары" тип аталған бигүк ҙур күләмле булмаған китап нәшер ителә. Тиражы ла күп түгел - 3 мең дана. Әлбиттә, ул 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының ҡаһарманлығына арналған. Ә 1942 йылдың октябрендә Башҡортостан делегацияһының, бер эшелон бүләктәр тейәп, фронтҡа, башҡорт атлылары менән осрашыуға килеүе хаҡында күптәребеҙ хәбәрҙар түгел. Делегация ағзаһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың юл яҙмалары ла ошо китапта баҫылып сыҡҡан. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ошо күләмле очеркты тәҡдим итәбеҙ. Яҙма Арыҫлан Таймасов эшкәртеүендә бирелә.**




## I. ЮЛДА

Өфө көҙөнөң 15 октябрь төнө ине. Беҙ, Башҡортостан партия ойошмаһының, Башҡортостан хөкүмәтенең һәм бөтә Башҡортостан халҡының вәкилдәре, башҡорт атлы дивизияһының воиндарына, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының XXV йыллығы айҡанлы, байрам бүләктәре илтеп тапшырырға юлға сыҡтыҡ.

Совнарком председателенең урынбаҫары иптәш М. Вальшин етәкселек иткән ун бер кешелек делегация составында: Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Бәҙәр Йосопова, РСФСР Верховный Советы депутаты, инженер Мәғрифә Мәүлүтова, БАССР Верховный Советы депутаты, стахановсы Ғәтиәт Рәхмәтуллин, дәүләт тегеү фабрикаһының стахановкаһы Латифа Батталова, завод стахановкаһы Раиса Тебикина, Салауат районы Малаяз ауыл советы председателе Нажиә Ямасова, "Ҡыҙыл Башҡортостан" газетаһынан Биби Нураева, Бөрө районы колхозниғы Петр Сальников һәм Туймазы районы колхозницаһы Фәүзиә Хурамшина иптәштәр бар ине.

Вагонға ултырғас та, үҙебеҙ алып бара торған бүләктәр менән таныштыҡ. Ә уйҙар шул бүләктәрҙе аласаҡ батыр егеттәргә киттеләр. Беҙ алып бара торған бүләктәр араһында: 12 тонна ҡаҡланған ит-колбаса, ун тоннаға яҡын бал, ике ярым тонна май, бер тонна ярым пряник, алты тоннанан артыҡ тауыҡ-ҡаҙ, 23 тонна тоҙло нәмәләр, өс йөҙ йәшник араҡы һәм башҡа аҙыҡтар бар ине. Ул бүләктәр бөтәһе 13 вагонға шығырым итеп тултырылғандар. Был вагондар араһында, барынан да бигерәк, тултырғансы индивидуаль бүләктәр генә тейәлгән бер вагон минең иғтибарымды үҙенә тартты. Был вагонда ни нәмә генә юҡ, тип беләһегеҙ! Бүләктәрҙең бөтәһе лә халыҡтан йыйылған. Уларҙың бөтәһендә лә халыҡтың көсө һәм ҡайнар мөхәббәте бар. Ләкин индивидуаль бүләктәр былар араһында айырым урын тота. Бында иң ҡәҙерле ҡунаҡтарға ғына йәки туйҙарҙа ғына бешерелә торған бауырһаҡтан алып, Иҙел буйында томрап үҫкән муйыл һәм Башҡортостан ҡырҙарында бешкән еләк ҡағына тиклем бар. Быңдағы аштарҙы әсәләр бөтә ғүмерҙәре буйына бешергән аштарҙан тәмле итеп бешерергә тырышҡандыр. Быңдағы яулыҡтарға һәм тәмәке янсыҡтарына төшөрөлгән сәскәләрҙә, биҙәктәрҙә ил ҡыҙҙарының күҙ осҡондары, перчаткаларҙа йөрәктәренең йылыһы бар.

Барынан да бигерәк ул бүләктәр үҙҙәре менән бергә боецтарға, командирҙарға һәм политработниктарға ысын күңелдән яҙылған сәләм хаттар алып бара. Фронттан тылға килгән хат ни тиклем ҡәҙерле һәм ҡиммәтле булһа, тылдан фронтҡа барған бүләк һәм хат тағы ла ҡәҙерле һәм ҡиммәтлерәк.

Миңә бер ваҡыт фронттан ҡайтҡан бер таныш командир, таныш булмаған бер әсәнән хатлы бүләк алғас, шул әсәнең хатында яҙылған әсәлек мөхәббәтен һәм ышаныһын аҡлар өсөн үҙе теләп боевой бурыс алғанын һәм батырлыҡ күрһәткәнен һөйләгәйне. Вагонда барған саҡта шул хәтеремә төшкәс, мин үҙ-үҙемә: беҙ алып барған бүләктәр һәм хаттар дивизияның воиндарын батырлыҡҡа ҡанатландыраcаҡ, тип уйланым.

Фронтҡа яҡыная башлағас, Ғәтиәт Рәхмәтуллин бер станцияла беҙҙең вагонға күкрәктәренә гвардия значоктары ҡаҙаған ике егетте алып инде. Улар икеһе лә Учалы районынан, береһе - Рысай ауылынан Шәңгәрәев Йыһангир, икенсеһе - Ялсығол ауылынан Багаев тигән егеттәр булып сыҡты. Улар госпиталдән сығып, икенсе тапҡыр фронтҡа китеп баралар. Беҙ уларҙы ҡунаҡ итеп һыйланыҡ. Айырылышҡан саҡта эскадрон командиры Йыһангир Шәңгәрәев:

- Башҡортостандан килгән иптәштәрҙе күргәс һәм тыуған илдең тупрағында үҫкән аҙыҡтарҙы ашағас, һағыныуҙар еңеләйеп, күңелгә рәхәт булып ҡалды. Мин үҙем генә 28 немецты үлтерҙем. Ә мин командирлыҡ иткән эскадрон бер рота немецты ҡырып бөтөрҙө. Хәҙер инде беҙ һуғыша беләбеҙ. Хәҙер беҙҙе немецтың һис бер нәмәһе өркөтә алмай, - тине.

Йыһангир Шәңгәрәев вагондан сыҡҡан саҡта бер һуған һорап алды һәм үҙенә хас бер мөләйемлек менән йылмайҙы ла:

- Таҙартылмағанын бирегеҙ. Еҫкәгән саҡта тыуған ерҙең еҫе сығып торһон һәм ерһегәндәрҙе баҫып, һағыныуҙарҙы еңеләйтерлек булһын, - тине.

Был ике лейтенанттан һуң ике полковник, бер майор һәм икенсе ранг военврач, рөхсәт һорап, беҙҙең вагонға инде. Башҡорт атлы дивизияһының боевой тормошо тураһында һәм, ғөмүмән, бик бай фронт иҫтәлектәре һөйләп барҙылар, һүҙ араһында Башҡортостан халҡының үҙ дивизияһына бер йыл эсендә өс тапҡыр шундай мул бүләк ебәргәнен белгәс, улар, бер-береһенә ҡарап, шатлыҡлы йылмайышты. Военврач, белорус М. У. Овсянников, төҫөнә серьёзлыҡ ҡиәфәте сығарҙы ла:

- Шундай ҡайғыртыусан халыҡтың улдары нисек итеп дошманға ҡаршы батыр һуғышмаһындар инде! Тыуған иленең, тыуған халҡының ошондай яҡын күреүенә боевой подвиг менән яуап бирә алмаған боецты дошман пуляһы түгел, ә изге аш хаҡы, ысын мөхәббәт хаҡы һуғып үлтерәсәк. Ләкин мин Салауат Юлаев улдарының халыҡ ышанысын аҡлаясаҡтарына аҙ ғына ла шикләнмәйем. Әгәр ҙә Белоруссия тупрағында берәй башҡорт егетенең ҡулын ҡыҫһам, үҙемде иң бәхетле кеше итеп һанар инем, - тине.

## II. ШАТЛЫҠЛЫ МИНУТТАР

28 октябрь. Ҡояшлы, йылы көн. Беҙҙең эшелон "Б" станцияһына килеп туҡтаны. Делегация члендарының ҡайһы берәүҙәре, ғәҙәт буйынса, поезд туҡтау менән станцияның комендатураһына йүгерҙеләр. Ул арала булманы, бер нисә иптәш:

- Үҙебеҙҙең кешеләрҙе таптыҡ, - тип шаулашып вагонға ике боецты алып килде. Дивизиянан тәү осраған был ике егетте беҙ ҡосаҡлап уртаға алдыҡ. Дивизия штабының ҡайҙалығын белдек. Телефон менән хәбәр иттек. Шулай ҙа уларҙың килгәнен көтөргә сабырлыҡ етмәне. Дивизияның станцияға кәрәк-яраҡ алырға килгән йөк машинаһына тейәлдек тә штабҡа йүнәлдек.

Күп булһа ун километр юл киткәнбеҙҙер, оло юлдан беҙгә ҡаршы ике еңел машина килеп сыҡты. Машиналарҙың беҙҙе ҡаршыларға килеүе тураһында аҙ ғына ла шикләнмәнек. Ул ысындан да шулай булып сыҡты. Беҙҙе алып бара торған машинаның шоферы ҡаршы килгән машиналарҙы таныу менән туҡтаны. Беҙ һикерешеп ергә төштөк. Теге машиналарҙан Ә.Абдуллин һәм Д.Ариткулов иптәштәр атылып килеп сыҡтылар ҙа беҙҙе ҡосаҡлап алдылар. Шул ваҡыт юлды ситләтеп уҙып барған ике казачка уларға аңлашылмаған телдә һөйләшә торған кешеләрҙең ниндәйҙер хәрби кешеләр менән булған был шатлыҡлы осрашыу моментын күҙәтеп, аттарын туҡтатып, ҡатып ҡалдылар. Улар фәҡәт беҙ ҡуҙғалып киткәс кенә үҙҙәренә килде һәм, юлдан ситкә сыҡҡан аттарын дисциплинаға саҡырып, юлдарын дауам итте.

Беҙ икегә бүлендек. Делегаттарҙың бер өлөшө ҡаршы килеүселәр менән бергә кире станцияға ҡайтты. Штабҡа барырға теләгән бер нисә кешене иптәш Ариткулов үҙе менән бергә алып китте.

Беҙ барып еткән саҡта инде дивизияның частары төнгө маршҡа юлға ҡуҙғалып яталар ине. Беҙҙе Ариткулов иптәш генерал-майор Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатов иптәш янына алып барҙы. Иптәш Шайморатов беҙҙе бик шатланып, оҙаҡ көтөп алынған ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ҡаршылаған кеүек итеп, бик йылы ҡаршыланы. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, беҙҙе әллә ҡасанғы таныш кешеләре һымаҡ итеп:

- Хуш килдегеҙ, минең һағынып көткән хөрмәтле ҡунаҡтарым һәм яҡташтарым! Беҙ бит һеҙҙең килеүегеҙҙе юлға сыҡҡан көндө үк радио аша ишеттек һәм башҡа юлдар менән дә белдек. Шуға күрә лә килтереп еткерә алмай йөҙәнек. Ләкин, зарар юҡ, һеҙҙең шулай иҫән-һау килеп етеүегеҙ өсөн беҙ бик шатбыҙ. Тик бына беҙ һеҙҙе ҡоро ҡул менән ҡаршы алып, бик ҙур оятҡа ҡалдыҡ бит әле. Сөнки хәҙер, бына ошо минутта ғына, бер ниндәй ҙә хөрмәт күрһәтергә мөмкинлегебеҙ юҡ. Ашамлыҡ тейәлгән йөктәр бөтәһе лә юлға сығып киттеләр, һеҙ, әлбиттә, быны өсөн беҙҙе ғәфү итерһегеҙ. Ә беҙ ул етешһеҙлекте юл барышында төҙәтербеҙ, - тип йылмайҙы.

Был минутта өҫтәл өҫтө ашамлыҡтар менән тулып торған саҡта ла ашау тураһында уйлау мөмкин түгел ине. Беҙ был минуттарҙа осрашыуҙың шатлыҡлы тәьҫире аҫтына күмелеп ҡалғайныҡ. Шул сәбәпле беҙ генерал-майорҙың борсолмауын үтендек һәм һүҙҙе ул тирәнән ситкә алып китергә тырыштыҡ.

Ул арала көн кисегеп ҡалды. Беҙ И. И. Гулиновтың машинаһына ултырып, беренсе тапҡыр дивизия менән бергә төнгө юлға сыҡтыҡ. Машинала барған саҡта Ғәтиәт Рәхмәтуллин менән беҙ генерал-майор тураһында булған беренсе тойғоларыбыҙҙы уртаҡлашып барҙыҡ.

Беҙҙең фекерҙәр бергә ҡушылып аҡты. Былай, тәү ҡарашҡа, һәр ваҡыт бер төҫлө, бик ҡаты тәбиғәтле һымаҡ булып тойолған генерал-майор, беренсе тапҡыр һәм бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә булған танышлыҡҡа ла ҡарамаҫтан, беҙҙең икебеҙҙе лә һоҡландырҙы. Уның хәрәкәтендә, һүрәттә кәрәгенән артыҡ ҡуйыртылған буяу төҫлө, ситтән ҡушылған артыҡ ҡыланыштар бөтөнләй юҡ. Һөйләшкән саҡта ул ҡатлауһыҙ һөйләшә, уйлағанын һөйләй. Үҙен ҙурайтҡыс быяла үтә күрһәтергә һәм эше тураһында маҡтанырға яратмай, һүҙгә һаран, ә уйға бик бай бер кеше булып кү-

✓ *Күҙҙе асыу менән минең башыма: "Генерал-майор ҡайҙа йоҡланы икән?" - тигән уй килеп төштө. Уны эҙләп мәшәҡәтләнергә тура килмәне. Сөнки ул минең менән йәнәшә, аҫтына бер бурка йәйеп, иҙәндә йоҡлап ята ине.*



рende ул беҙгә тәүге осрашыуҙа.

Бер 15-20 километр юл китеү менән беҙ бер ауылға барып индек. Беҙҙе алып килгән машина, үҙен аҫраған хужаның йортона теләһә ниндәй ваҡытта икеләнмәйенсә ҡайтып йөрөй торған ат һымаҡ булып, бер өйҙөң ҡапҡаһы төбөнә килеп туҡталды. Ҡапҡанан ялт итеп, генерал-майорҙың адъютанты лейтенант Сәфиуллин Мәхмүт килеп сыҡты. Иптәш Гулинов һикереп төштө лә машинаның ишеген асты һәм:

- Рәхим итегеҙ! - тине. Беҙҙе өйгә алып инделәр. Унда беҙҙе әҙерләнгән өҫтәл янында баҫып торған иптәш Шайморатов ҡаршыланы һәм өҫтәл эргәһенә саҡырҙы. Өҫтәлдә - бәләкәй табаҡҡа тултырып килтерелгән тоҙло помидор, туралған ҡаҙ, кирбес кеүек киҫелгән май, икмәк һәм башҡа нәмәләр беҙҙе үҙҙәренә тартып тора ине. Шайморатов иптәш беҙҙе һыйларға ашыҡты һәм:

- Армия тормошонда командирҙың һүҙе - закон. Хәҙер һеҙ беҙҙең кешеләр булып һаналаһығыҙ. Фронтта тартынып торорға ярамай, фронт ҡыйыулыҡ урыны: боецтарса ашағыҙ. Беҙгә ҡарамағыҙ, беҙ һеҙ килгән саҡта ғына табын янынан китеп тора инек, - тип шаярып алды. Уның был һүҙҙәре беҙҙең аппетитты күтәреп ебәрҙе. Ул арала булманы, какао ла ҡайнап өлгөрҙө. Беҙ бик тиҙ арала иптәштәр менән, әллә ҡасанғы дуҫтар, ағай-энеләр кеүек булып, үҙләшеп киттек.

Был аштың беҙҙең өсөн генә әҙерләнгәнен аңлағас һәм генерал-майорҙың, түбәнселек күрһәтеп, хөрмәт йөҙөнән беҙ ултырған өҫтәл янында баҫып торғанын күргәс, оялтҡыс булып китте һәм һикереп тороп, урындыҡты уға ултырырға тәҡдим итке килде. Беҙ бында оҙаҡ торманыҡ. Иптәш Шайморатов: "Һеҙ хәҙер беҙҙең боевой тормош шарттарына яйлашырға тейешһегеҙ. Марш ваҡытында беҙ төндә барабыҙ, көндөҙ йоҡлайбыҙ. Юл кешеһе юлда булған яҡшы", - тип тағы ла шаяртып алды.

Икее оло юлдың арҡыры киҫешкән ерендә беҙ тағы ла М. Шайморатов, Абдуллин һәм уларҙың машиналарына ултырған үҙебеҙҙең делегаттарҙың бер төркөмө менән осраштыҡ та, бергәләп юлды дауам иттек.

Төн урталары булғандыр, бер ауылға етеп туҡтаныҡ. Беҙҙе генерал-майор өсөн билдәләнгән бер өйгә урынлаштырҙылар. Ул төндә беҙ М. Шайморатов иптәш менән туғандарса һөйләшеп, уйнапкөләп үткәрҙек. Беҙ тылды, ул беҙгә фронтты һөйләне.

Был ултырышыу ваҡытында генерал-майорҙың характеры минең күҙ алдымда тағы ла тулыраҡ һәм асығыраҡ күҙәләнә төштө. Был төндә беҙ иптәштәргә тыуған ерҙән алып барған күстәнәстәрҙән башлап ауыҙ иттерҙек. Композитор Хәбибулла Ибраһимовтың минең һүҙҙәргә яҙған "Илде бирмәбеҙ!" тигән музыкаһын хор менән йырлап күрһәттек. Был көй генерал-майорға бик-бик оҡшаны. Аҙаҡтан ул был көйҙө бер нисә тапҡыр һорап йырлатты. Бер ваҡыт Сәфиуллин ҡайҙандыр гармун күтәреп килеп инде. Өфөнөң Ущельеһендә үҫкән таҙа һәм сибәр егетте мин, гармунсы булһа кәрәк, тип уйланым. Тиҙерәк Ущелье мотивтарын уйнап ебәреүен көттөм.

Ләкин, һис бер уйламағанда, бөтәбеҙҙең дә ғәжәпләнеүенә ҡаршы, Мәхмүт Сәфиуллин гармунды генерал-майорға килтереп тотторҙо. Беҙ шым булдыҡ. Мин тәүҙә үҙүҙемә "Мин уйлағандан да шаянраҡ кешеме икән ни һуң был иптәш?" тип һорау бирҙем. Уғаса булманы, башҡаса уйланырға өлгөрә алманым, генерал-майор хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылының урамынан гармунсы егет булып үткән саҡтағы бер көйҙө уйнап та ебәрҙе һәм беҙҙең уйҙарыбыҙҙы хәҙерге генерал-майор, элекке гармунсы егеттең лирикалы йөшлегенә алып китте.

Беҙ таң алдынан ғына йоҡларға яттыҡ. Ауыл уҡытыусыһының бер карауат, ике эскәмйә һәм бер өҫтәлдән торған йыһазы урынлашҡан бәләкәй бүлмәһендәге урындарҙы генерал-майорҙың тәҡдиме менән рациональ файҙаланыу арҡаһында беҙҙең йоҡо урындары бик уңайлы булды. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан дүрт кеше, аяҡ осона эскәмйә ҡуйып, карауаттың арҡырыһына теҙелешеп яттылар. Минә үҙем кеүек оҙон бер эскәмйә тейҙе. Ғәтиәт Рәхмәтуллин, бер күтәрем бесән индереп, алғы бүлмәнең иҙәненә түшәне лә, йоҡлап та китте. Йоҡларға урын бүлешеү эшендә ғәҙелһеҙлек күрһәтеп, үҙҙәрен урынһыҙ ҡалдырыуҙарын тәнҡитләй башлағайныҡ та, барып сыҡманы, армиялағы единоначалие хоҡуғын онотоп ташлағанбыҙ икән. М. Шайморатов иптәш үҙенең командирлығынан файҙаланып, эште приказ юлы менән хәл итте лә ҡуйҙы:

- Беҙҙең ҡайҙа, нисек һәм ҡасан йоҡлауыбыҙҙы тикшереү һеҙҙең бурысығыҙға инмәй, ҡунаҡ иптәштәр, ул хәрби сер. Унан һуң, ҡунаҡ хужаның ишеге тигән мәҡәлде лә онотмағыҙ, - тип көлдөрҙө Шайморатов иптәш. Беҙ ризалашырға мәжбүр булдыҡ.

Иртән йоҡонан иң элек мин уяндым. Күҙҙе асыу менән минең башыма: "Генерал-майор ҡайҙа йоҡланы икән?" - тигән уй килеп төштө. Ләкин уны эҙләп мәшәҡәтләнергә тура килмәне. Сөнки ул минең менән йәнәшә, аҫтына бер бурка йәйеп, иҙәндә йоҡлап ята ине.

Был күренеш минең күңелгә, нисектер, ауыр кисереш тойғоһо тоҡандырҙы, һикереп торғом килде. Ҡайҙандыр йомшаҡ мамыҡ мендәр алып, уның баш аҫтына һалырға, өҫтөнә йылы юрған ябырға теләнем. Ләкин был минутта мин уның баш аҫтына үҙемдең йомшаҡ тойғомдо һалыуҙан, өҫтөнә йылы күҙ ҡараштарымды ябыуҙан башҡа бер нәмә лә эшләй алманым.

**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРКИТАП



# КҮҘҘӘН ҮТКӘРӘЙЕК

## Ауылда ҡатын-ҡыҙ ирҙәр һөнәрен үҙләштерә

● Һуғыш йылдарында ауыл хужалығы производствоһында эшләүҙең бар ауырлығы ҡатын-ҡыҙ елкәһенә төшә. Улар тракторсы, комбайнер, водитель, колхоз рәйесе, бригадир булып эшләй.

● Колхоз-совхоздарҙа комсомол-йәштәр бригадалары ойошторолa һәм уларҙың ҡайһы берҙәре Йәштәр бригадаларының Бөтә Союз ярышында бер нисә тапҡыр беренселекте яулай. 1944 йылда Башҡортостанда бындай бригадалар һаны өс мең самаһы була. Әлшәй районынан патриотик хәрәкәт инициаторы Нина Саламатинаның йыл һайын һәр гектарҙан 20-25 центнер яҡшы иген алған звеноһы зур популярлыҡ яулай.

● СССР-ҙың азат ителгән райондарына ярҙам күрһәтеү өсөн республика комитеты ойошторолa. Башҡортостан Ворошиловград өлкәһе (хәҙер Луганск өлкәһе) һәм Сталинградты шефлыҡҡа ала. 1943 йылдың 13 сентябрендә Ворошиловградҡа сәнәғәт ҡорамалдары һәм аҙыҡ-түлек менән беренсе эшелон оҙатыла, йыл һуңына ҡорамалдар, техника һәм материалдар, 15 мең ат, 18 мең һарыҡ, 9 мең сусҡа, 7 мең баш эре мал менән 90 вагон оҙатыла. Шулай уҡ Сталинградҡа, Харьковҡа һәм башҡа ҡалаларға төҙөләш материалдары ебәрелә.

● Һуғыш йылдарында Башҡорт АССР-ы 1479,5 миллион һумлыҡ, йәғни СССР производствоһының 2,2 проценты, ауыл хужалығы продукцияһын етештерә. Фронтҡа 71 мең ат, 750 трактор, аҙыҡ-түлек ебәрелә.

● 1943 йылда мобилизацияға бәйле эшкә яраҡлы колхозсылар һаны 31 процентҡа, йәғни 218 мең кешегә кәмей.

● Республикала колхоздарҙа һәм совхоздарҙа, нигеҙҙә, малсылыҡ, баҡсасылыҡ, игенселек, орлоҡсолоҡ менән шөғөлләнәләр. Шул уҡ ваҡытта ауыл крәҫтиәненең йәшәү шарттары бик түбән була. Һуғыш йылдарында ауыл халҡының һаны 706,5 мең кешегә кәмей. Ауылдан эшкә яраҡлы халыҡтың 18 проценты мобилизациялана. Колхозсыларҙың үҙ хужалығынан алған продукция ғаиләләрҙең иң түбән ихтыяжын да ҡәнәғәтләндереүгә етмәй. Етерлек ашамауҙан дистрофия менән ауырыусылар күбәйә.

## Мәҙәниәт тә эшен туҡтатмай

● Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Өфөлә ысын мәғәнәһендә мәҙәни күтәрелеш башлана. Патриотик күтәрелеш тулҡынында яңы әҙәби һәм музыкаль әҫәрҙәр ижад ителә, улар башҡорт сәнғәтенең классикаһына әүерелә. Барлыҡ ошо йылдарҙа Башҡортостанда үҙ дәүеренең символына әйләнгән Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Сәғит Агиш, Ғариф Ғүмәр һәм башҡалар йәшәй һәм эшләй.

● 1944 йылдың 12 сентябрендә Өфөлә булаcаҡ билдәле сәнғәт эшмәкәре, Милли филармония оркестры дирижеры, СССР-ҙың халыҡ артисы Владимир Спиваков тыуа. Уның әсәһе, пианист Екатерина Вайнтрауб Ленинград блокадаһын үтә, һуңынан уны Өфөгә эвакуациялайҙар. Бында ул Өфө моторҙар эшләү заводының "Ударник" клубында концертмейстер булып эшләй. Тормош иптәше Теодор Спиваков заводта термик цехтың контроль мастеры булып эшләй. Һуғышта ауыр яраланғандан һуң демобилизациялана һәм аҙмыш уны тап Башҡортостандың баш ҡалаһына килтерә.

● Һуғыш башланыу менән Өфө театрҙары үҙҙәренең репертуарын яңынан төҙөй. Алдынғы театр коллективтары хәрби темаға әллә күпме спектаклдәр ҡуя. 1944 йылда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Лев Степанов һәм Заһир Исмәғилев музыкаһына беренсе башҡорт балеты - "Аҡҡош күле" ҡуйыла. Балетмейстеры - Нина Анисимова.

## Утыҙ яҙыусы иҫән ҡайта

● Тыуған илгә тоғролоҡҡа ант биреп, бик күп Башҡоростан яҙыусылары фронтҡа китә. Уларҙың 18-е яу яландарында башын һала. Утыҙы яраланып һәм төрлө наградаларға эйә булып әйләнеп ҡайта. Ул ваҡытта халыҡ шағирҙары Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, орден эйәһе Баязит Бикбай, яҙыусы Сәғит Агиш, Ғариф Ғүмәр, Әкрәм Вәлиҙең тауышы яңыса яңғырай.

● Һуғыш һәм совет халҡының һуғыштағы ҡаһарманлығы илдең күп милләтле әҙәбиәтендә күп китаптарҙың нигеҙенә ята.

## Өфөлә - туғандаш илдәр президенттары һәм билдәле коммунистары

● 1941 йылдың октябрендә Башҡорт АССР-ының баш ҡалаһына Коммунистик Интернационалдың Башҡарма комитеты - Коминтерн эвакуациялана. 1943 йылдың майына тиклем элекке Коммерция училищеһы (хәҙер Ленин һәм Революцион урамдар киҫелешендәге Өфө авиация колледжы) бинаһында коммунистик хәрәкәттең билдәле эшмәкәрҙәре ултырыштар үткәрә. Улар - итальян коммунисы Пальмиро Тольятти, Болгарияның булаcаҡ лидеры Георгий Димитров, Чехословакияның булаcаҡ президенты Клемент Готвальд, билдәле испан революционеры Долорес Ибаррури, француз коммунистар партияһы етәксеһе Морис Торез, немец-антифашисы, ГДР-ҙың булаcаҡ президенты Вильгельм Пик һ.б. 1942 йылдың 7 мартында Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған митингыла демонстранттар алдында Долорес Ибаррури сығыш яһай.

## Өфөнән Гитлерға ҡаршы агитация тарала

● Булаcаҡ революционерҙарҙы әҙерләүҙән тыш, Коминтерн Башҡарма комитеты ағзалары һәр көн агитация материалдары менән эфирға сыға һәм 18 телдә тапшырыуҙар алып бара. Редакция һәм радиорубка хәҙер Главпочтамт урынлашҡан бинала була. Сигнал Глумилино ауылындағы радиовышка ярҙамында тапшырыла. Легендар диктор Левитан тауышы менән бөтә илгә таралған фронт хәбәрҙәре тап ошо радиовышка аша үтә. Башҡортостандың баш ҡалаһынан антифашистик тапшырыуҙарҙы Европаның барлыҡ оккупациялағы территорияһында тыңлайҙар, сигнал хатта Америкаға ла барып етә.

● 1941 йылдан 1945 йылға тиклем Башҡортостанда балалар йорттары һаны 28-ҙән 130-ға тиклем, ә балалар һаны 4 меңдән 16300 кешегәсә арта.

● 1945 йылдың 28 июлендә Өфөгә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы демобилизацияланған яугирҙар тейәгән беренсе эшелон ҡайта.

✓ *Ниҙәр генә күрмәй юлсылар. Яу үткән ерҙәр ҡорт төшкән ағас һымаҡ йырғысланған. Мал-тыуар траншеяларға төшөп китә. Донъяның аҫты-өҫкә килгән, ер аҡтарылып, ил-йорт емерелеп, үртәлеп, һуғыш ҡоралдары туҙып ята.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮП БАЛАЛЫ... тиҙ ҡартаймай

■ Ҡатын-ҡыҙҙың балалары ни тиклем күберәк, улар шул тиклем яйыраҡ ҡартая. Күп балалы әсәйҙәрҙә хромосоманы һаҡлап тороусы оҙон теломерҙар күберәк була. Күҙәнәк бүленгән һайын теломер ҡыҫҡара бара. Ә ҡыҫҡарған теломер хромосоманы яҡлай алмай һәм күҙәнәк эшләү һәләтен юғалтып, ҡартая. Саймон Фрейзер университеты профессорҙары билдәләүенсә, һәр бала тапҡан һайын теломерҙар оҙоная. Ғалимдар быны эстроген гормоны менән бәйләй. Ҡатын кеше ауырлы саҡта был гормон кимәле юғары була. Ә эстроген - антиоксидант, ул теломерҙарҙы ҡыҫҡарыуҙан һаҡлай.

■ Австралияның диетологтар ассоциацияһы ғалимдары ҡәһүә яратыусыларға тағы ла яҡшы яңылыҡ еткерә. Ҡәһүәне күп эсеү йөрәккә зыянлы тип иҫәпләүселәр яңылыша, тиҙәр улар, шулай ҙа сама белеү ҙә кәрәк. "Был ни тиклем ҡыҙыҡ күренмәһен, ҡапыл үлеү коэффициенты ҡәһүәне даими ҡулланыусылар араһында иң түбәне. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 1-2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр ұҙҙәренә оҙайлы һәм бәхетле ғүмер йәшәү мөмкинлеге бирә", - ти профессор Клэр Коллинз. Етмәһә, сифатлы ҡәһүәлә бауырҙы зарарлы токсиндарҙан һаҡлаусы элементтар бар, тимәк, бауыр яман шешен булдырмай был эсемлек. Тик ҡәһүәнең файҙаһы булһын өсөн уны һөтһеҙ, шәкәрһеҙ эсергә кәрәк.

■ Хәҙерге заман кешеләре смартфонға ныҡ бәйле, улар был замана техникаһын бер минутҡа ла ҡалдырмай. Был сәләмәтлек өсөн ҙур зыян килтерә, ти ғалимдар. Телефон иң тәүҙә зарарлы нурҙар таратыуы менән насар. Доктор Девра Дэвис телефонды кеҫәлә йөрөтөргә кәңәш итмәй. Югиһә, телефон нур терапияһына тиң ти улар. Табиптар телефондан бүленгән күләмдәге нурҙарҙы бауыр яман шешен даулау, баш мейеһендә дарыуҙарҙың уҙләштерелеүенә булышлыҡ итеү өсөн ҡуллана. Эксперт һүҙҙәренә ҡарағанда, телефон депрессияға, диабетҡа килтерә ала, йөрәк эшмәкәрлеген боҙа. Шуға ла телефонды сумкала йөрөтөргә кәрәк.

■ Көндәҙ йоҡо баҫһа, тиҙ арала имбирлы сәй эшләп эсергә кәрәк. Ул ҡан әйләнешен тонусҡа килтерә, аш һеңдереү процесын яҡшырта, ҡанды шыйыҡайта. Атеросклероз менән яфаланғанда файҙа килтерә, йүтәлләүҙән дә арындыра. Бөтә организмдан шлак һәм токсиндарҙы сығарырға ярҙам итә, иммунитетты нығыта. Бындай файҙалы имбирлы сәйҙе әҙерләү өсөн ярты литр ҡайнар һыуға 2-3 сантиметрлыҡ итеп ҡырҡылған яңы имбир тамыры, кардамон ҡуҙағы, бер семтем корица, бер балғалаҡ йәшел сәй, ярты лимон һәм ҡәнәфер һалып, уртаса ғына утта 3-4 минут тоторға. Бер аҙ һыуынғас, йылы сәйгә өс ҡалаҡ сәскә балы һалып эсергә.

■ Кем йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфалана, уларҙа депрессия ла күҙәтелеүе ихтимал, ти Эмори университеты ғалимдары. Йөрәк өйәнәге менән дауаханаға эләккәндәрҙең 20 процентында был замана сире күҙәтелә икән. Шуға ла белгестәр депрессия менән яфаланыусыларға спорт менән шөғөлләнергә кәңәш бирә. Сөнки әүҙем тормош алып бармағандар йышыраҡ күңел төшөнкөлөгөнә бирелә.

ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ...

# ӘҘӘМ ЫШАНМАҪЛЫҠ СӘЙӘХӘТ



– Их, шул саҡта быҙауҙарҙы бер нәмәһеҙ ҡалған күп балалы ғаиләләргә бирергә кәрәк булған... - Мөхәмәҙи, Әхмәт ағайҙар, Фәрзәнә апай әле шулай тип үкенес белдерә.

- Эй барабыҙ, эй китәбеҙ, һис барып етә алмайбыҙ. Эй Аллам, күпме ерһыу гиҙҙек... - Осо-ҡырыйы күренмәгән юлдан ялҡып, ошолай һөйләнеп тә ҡуялар. Ай әйләнә, көн үтә, йәнә ай үтә. Юл ғазабы ысынлап та гүр ғазабы икән. Мунса төшөү төшкә генә инә. Бетләйҙәр, ҡысыналар, ҡашыналар. Ҡулдарын кұлдәк эсенә тыҡһалар, беттәр эләгеп сыға. Кейемдәрен сисеп, усаҡҡа тотҡан, һелккән булалар. Ут ҡыҙыуына, ялҡынына бет ҡойолоп төшә. Илағһың да, көлөрһөң дә. Малайҙарҙың йыртылып, тетелеп бөткән кейемдәрен Әсмә әбей ямаштырып бирә. Ҡарттар сәстәрен ҡырып ташлай.

- Күрмәгәнгә күрһәтмәһен инде бындайҙы, - тип әле лә әрнеп, күҙ йәштәрен һөртә Фәрзәнә апай.

Тәү мәртәбә хәтһеҙ оҙон, оҙайлы сәфәр сыҡҡан Фәрзәнә, Әхмәт, Мөхәмәҙи туғандарын, ауылдарын юҡһына. Тик яҙмыштарына буйһонмай саралары юҡ. Уларҙы ғына түгел, хатта өлкәндәрҙе лә һағыш баҫа. Ана, Әһел ағай кистәрен моңһоу көйҙәр һуҙа:

*Ағиҙелдең арьяғында*
*Ҡалды тыуған илгенәм, шул,*
*Ҡалды тыуған илгенәм...*

Күҙе насар күреү арҡаһында һуғышҡа алынмаған Әһел ағай оло юл үткәндә ун алты йәшлек Фәрзәнәне кәләш итер. Йөрөп ҡайтҡас, дүрт йыл бергә йәшәрҙәр, Әлфиә исемле ҡыҙҙары тыуыр. Әле кистәрен Фәрзәнә лә күңелен йыр менән бушатып һыйыр һауа, йөрәктәрендә һөйөү ҡуҙы ҡабынырға өлгөрмәгән Мөхәмәҙи менән Әхмәттең дә игтибарын йәлеп итә. Һөләк һымаҡ һылыу ҡыҙ менән шаярһалар, Әһел ағай ороша.

Күп йәшәгән күрмәгәнде күп йөрөгән күрер, тигәндәй, ниҙәр генә күрмәй юлсылар. Яу үткән ерҙәр ҡорт төшкән ағас һымаҡ йырғысланған. Мал-тыуар траншеяларға төшөп китә. Донъяның аҫты-өҫкә килгән, ер аҡтарылып, ил-йорт емерелеп, үртәлеп, һуғыш ҡоралдары туҙып ята. Танкылар, пушкалар, снарядтар, ҡолап төшкән самолеттар... Аяҡ аҫты тулы патрон, мылтыҡ, яу-һуғыш ҡоралы. Бөткөһөҙ ҡайғы-хәсрәт, күҙ-йәш күреп, мал ҡыуыусылар мылтыҡ, автомат-фәләнгә йөгөнмай, алып ҡайтыуҙы ла хуп күрмәй. Ауылдары яндырылған, емертелгән кешеләрҙең хәлдәре үтә мөшкөл. Ҡайҙа баҡма - һуғыш касафаты. Юлдаштары көйөнһә, Ҡаф тау артына китеп барыуҙарына бошонһа, ҡарттар:

- Йыл йөрөйөк, аман йөрөйөк. Иҫән барып, һау ҡайтайыҡ. Өйҙә ятып ни белер инек? Илгә сығып ғибрәт күрҙек, һуғыш тиҙерәк бөтһөн инде. Быуна ир-уҙамандар ҡайтыр, - тип күңелдәрҙе йыуата.

Бара-бара Дон тигеҙлегенә килеп сығалар. Күҙ-ҡарашҡа яҡын тойолған, хәҙер барып етәм тип ашҡынған ерҙәргә бара торғас, йән түҙемдәре бөтә. Ололар йәнә тынысландыра:

- Юл, мал яфаһы - баш бәләһе түгел, уландар. Ана, һуғыш ҡайғыһын кисергәндәргә бигерәк ауыр.

- Ҡайҙа мал ҡыуаһығыҙ? - тип һорашҡан була улар.

- Украинаға, Украинаға...

Аҫ, яланғас кешеләр көтөүгә һөжүм итмәй. Бары Воронеж эргәһендә генә хәүефкә һалған хәл була. Туҡталған мәлдә һалдат кейемендәге бер нисә кеше көтөүгә баҫыша, ҡулдарында бысаҡ ялтырай. Ҡарауылсы һунар мылтығынан гөпөлдәтеп һауаға ата, мал ҡыуыусылар берҙәм аяҡҡа баҫа. Баҫҡынсылар ҡаса.

Бер мәл Әхмәт менән Мөхәмәҙи һыйырҙар артынан Дондың бирьяғындағы һаҙамыҡ урынға инһә, ҡоттары осоп туҡтап ҡала. Учалыла зыяратта бала ҡулын тешләп йөрөткән эт ни генә ул! Бында кеше мәйеттәре, һөлдәләре, баштары, котелоктары ер өҫтөндә таралып ята. Дон йылғаһын пантон күпер аша сыҡҡас та аяныс күренештәрҙе үҙ күҙҙәре менән күрәләр. Бер ҡая аҫтында госпиталь булған. Дошман яралыларҙы йәлләмәй атҡан. Илеңде яу баҫһа, яман икән. Күпме ҡорбан, күпме зар! Ҡарттар, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар ер соҡоп, оя-өң яһап, ошонда йәшәп ята.

Туҙан туҙҙырып, саң борҡотоп көтөү һаман бара ла бара. Харьковҡа яҡынлашалар. Төнөн һауаны прожекторҙар телә, самолеттар геүелдәй. Ҡуркыныс! Көндөҙөн дә шөбһәләнәләр, уҡыналар:

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Әүлиәнең кирәмәте тураһында

Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре Мәккәи-Мөкәрәмәгә барған. Шул ваҡыт Мәккәлә йотлоҡ һәм аслыҡ була. Мәккә халҡы Ғирафәткә сығып, ямғыр ҙа теләй, әммә уныһы һаман яумай икән. Бер йоманан һуң тағы сығa былар ямғыр теләргә. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре лә улар менән бергә сыға. Шул ваҡыт ул ошондай күренешкә тап була: бер зәғиф кенә ҡара тәнле кеше ике ҡат намаҙ уҡып, һуңында доға әйтеп, сәждә ҡыла һәм: "Ярабым, ҡолдарыңды ямғыр менән һуғарғансы башымды сәждәнән күтәрмәм", - тип ялбара икән. Шул сәғәттә үк бер болот килеп сығып, уға тағы ла икенсеһе ҡушылып, ямғыр яуа башлай. Барса әҙәм туҡ булып, рәхәт сигеп ҡала. Бынан һуң ҡара тәнле кеше "Ярабым, һорағанымды бирҙең", тип, Аллаһы Тәғәләгә шөкөр ҡылып, маҡтау әйтә лә, Мәккәгә ҡарай китә.

Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре, был изге әҙәмдең бараһы урынын беләйем, тип, уның артынан эйәрә. Ҡара тәнле кеше Мәккәгә етеп, ҡол һәм йәриәләр һатыусының йортона барып инә. Иртәгеһен Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре әлеге йортҡа килә лә, хужаны күреп: "Әй, хужа, миңә бер ҡол кәрәк ине, ҡолдарыңды сығар әле, күрәйем", - ти. Уныһы барса ҡолдарын сығарып күрһәтә, ләкин кисәге

✓ *Мең ғазап сигеп, малды Украинаға алып барып еткергән кешеләрҙе миҙал, орденға тәҡдим итеү түгел, уларға рәхмәт белдереүсе лә булмай. Киреһенсә, юлда зыянлаған өс тана-башмаҡтың хаҡын түләтә уларҙан заготскот.*



- Ялан тулы көтөү. Бомба ғына ташламаһалар ярар ине. Эй, Хоҙайым, ғазраилдан ярлыҡа. Балаларҙың бәхетен бир. Тыуған илебеҙгә имен-аман әйләнеп ҡайтайыҡ...

Хәтәр хәлдәр кисереп, Харьков янында торалар, һалдаттар һыйырҙарҙы күреп яҡын килә, ҡайҙан икәнде белешә. Мал ҡыуыусыларҙың Башҡортостандан булыуын ишетеп, яугир, Яйыҡ буйы егете Ишмөхәмәт Кинйәбулатов та килеп, күңеле булғансы һөйләшеп китә. Һалдаттар ҡала урамдарынан көтөүҙе сығарыша, һөт менән һыйлаған өсөн рәхмәттәр әйтә. Шулай итеп, Учалынан Украинаға йәйәүләп, туғыҙ айҙа, декабрь аҙағына, килеп етәләр.

Мөхәмәҙи, Әхмәт ағайҙарҙың һөйләүенә ҡарағанда, һыйырҙарҙы Харьковтан етмеш саҡрымлап ары Староверовка тигән ергә алып барып тапшырғандар. Уларҙы егерменән ашыу хужалыҡ вәкилдәре шунда уҡ бүлешеп алған. Туғыҙ ай эсендә малдар үҫкән, ҙурайған. Көтөү башы ҙур ала һыйыр ғына баш бирмәй, тотормай ыҙалата. Аттарҙы, арбаларҙы ла бирәләр.

Башҡорттар украин телен төшөнмәһә лә, күңел алсаҡлығы аңлашыла. Украиндар алма менән һыйлай, ҙур ярҙам өсөн ни хөрмәт күрһәтергә белмәй. Йәнә учалылар бер хужалыҡҡа кукуруз йыйырға ярҙамлаша. Шунан рәхмәттәр әйтеп, поезға ултыртып, оҙатып ҡалалар. Тыуған яҡҡа яҡынайған һайын нығыраҡ йөрәкһенәләр. Әммә Өфөлә поезға эләгә алмай, бер нисә көн мунсала төн сығалар. Ниһәйәт, Миәскә килеп төшәләр. Инде Көньяҡ Уралда ҡыш урталы, ғинуар айы. Мөхәмәҙи, Әхмәт, Фәрзәнә, ағайҙары, апайҙары тубыҡтан ҡар йырып, йөҙ саҡрымды йәнә йәйәү ҡайта.

- Өйҙәгеләр мине тере килеш күреп, илашып ҡаршыланы. Үлеү хәбәребеҙ килгән булған бит. Иҫән-һау ҡайтыуымды күрергә күрше-күлән, ауылдаштар ҙа килде. Ҡырағай алма алып ҡайтҡайным Украинанан, шул күстәнәстән ауыҙ иттерҙем, - тип ауылына нисек ҡайтыуын һөйләне Мөхәмәҙи ағай.

Мең ғазап сигеп, малды Украинаға алып барып еткергән кешеләрҙе миҙал, орденға тәҡдим итеү түгел, уларға рәхмәт белдереүсе лә булмай. Киреһенсә, юлда зыянлаған өс тана-башмаҡтың хаҡын түләтә уларҙан заготскот. Һуғыштан һуң еңеү көндәрен байрам иткәндә лә был ҡаһарманлыҡты иҫкә алыусы, билдәләүсе табылмай. Мәжлес-күнаҡта һүҙҙән һүҙ сығып, ошо турала яҡташтарына һөйләнәләр - ышанмайҙар.

- Шул хәтле ергә анау ҡәҙәре мал менән йәйәү бара торғаның бармы... Ысынмы, әллә юҡты һөйләйһеңме? - тиҙәр.

Учалынан Украинаға мал ҡыуыусы егерме бер кешенең беҙгә өсәүһе генә иҫән булыуы билдәле... Ололар күптән мәрхүм, Мөхәмәҙи, Әхмәт, Фәрзәнә әҙәм ышанмаҫлыҡ сәйәхәттән һуң бер-ике мәртәбә генә осрашып күрешкән.

- Үткән йыл баҙарҙа: "Арыуымы, синеглазкайым" тип килеп күрешкән һин инеңме, Фәрзәнә? - тип һорай Мөхәмәҙи ағай.

- Мин инем шул. Әллә танымаһыңмы?

- Ҡайҙан таныйһың? Әле лә танымай торҙоҡ. Элек бит нескә билле һылыу ҡыҙ инең. Әһел элгәктереп әлгәрҙә шул элгәре, беҙ тороп ҡалдыҡ. - Фәрзәнә апайҙың йөҙөнә нур өҫтәп, ун алты йәшлек саҡтарын иҫкә төшөрөп, шаярып һөйләшә инде алтмышты уҙған ағайҙар.

Уларҙан мал ҡыуыуҙары тураһында бәйнә-бәйнә белергә тырыштым, ҡат-ҡат һораштым, ҡәнәғәтләнеү белмәй һаман төпсәнәм.

- Ул ваҡытта беҙ ун алты йәшлек кенә үҫмерҙәр инек бит. Инде ҡырҡ алты йыл үтте. Исмаһам, егерме йыл элегерәк һөйләшеп ултырғанда ла күберәк хәтерләр инек, - тип үкенес белдерҙеләр.

Уйлаһаң, улар герой исеме бирерлек ҡаһарманлыҡ эшләгән. Хәтһеҙ йылдарҙан һуң булһа ла ошо ҡаһарманлыҡты билдәләп, Фәрзәнә Йонособа-Хәмитованы, Мөхәмәҙи Буранбаевты, Әхмәт Закировты Бөйөк Ватан һуғышы, йәки Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләү намыҫ эше. Йәнә уларҙы Украинаға мал тапшырған ерҙәренә алып барып осрашыуҙар үткәреү хәйерле булыр ине.

Башҡортостандың азат ителгән өлкәләргә, Украинаға эскерһеҙ ярҙамы, халҡыбыҙ тарихының онотолмаҫҡа тейешле бит үткәне "Башҡортостан тарихы буйынса очерктар" китабында (11 том), "Красная Башкирия" (1944 йыл, 24 һәм 31 май, 14 июль), "Ҡыҙыл Башҡортостан" (1944 йыл, 31 май һәм 4 август) гезеталарынан алынған мәғлүмәттәр нигеҙендә бер нисә һөйләм менән генә яҡтыртылған:

- Республика байтаҡ ҡына азат ителгән өлкәләрҙең һәм ҡалаларҙың халыҡ хужалығын тергеҙеүгә ярҙам күрһәтте. Башҡортостан Украинаның Ворошиловград өлкәһенә шефлыҡ итте. 1943 йылда уға 90 вагондан ашыу промышленность ҡорамалдары һәм ауыл хужалығы кәрәк-яраҡтары ебәрелде. Курск, Ворошиловград, Ленинград, Смоленск, Воронеж, Харьков өлкәләренең малсылығын тергеҙеүгә Башҡортостандың колхоз крәҫтиәндәре 1943-1944 йылдарҙа 146 мең баш мал ебәрҙе, шул иҫәптән 8736 эш аты, 15739 һыйыр малы, 21671 һарыҡ.

Ә ошо ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт, һандар ышығында күпме ваҡиғалар, хәлдәр, кеше яҙмыштары... Яйыҡ буйы уларының һәм ҡыҙҙарының да илдең оло юлдарында эҙҙәре ҡалған. Ошо эҙҙәрҙе, йәшлекте эҙләп, ағайҙар уҙған ғүмерҙәрҙе иҫләне. Хәтирәләрҙе терелткәс, Фәрзәнә апай түҙмәне, иланы.

Уларҙың артабанғы яҙмыштары ҡалай булған һуң? Тыуған ерҙәрендә ереккәндәр. Украинанан йөрөп ҡатҡас, Фәрзәнә Учалылағы Ленин исемендәге старателдәр артеленең химзаводында эшләй, Буранcы ауылында торф сығара. Ауырлыҡтарға зарланмай, күңел төшөнкөлөгөнә бирешмәй. Ил эшендә йөрөп, хаҡлы ялға сыға, ике ҡыҙ үҫтереп кейәүгә бирә.

Мөхәмәҙи тракторсылар курсын тамамлай. Өҫтәлдәрҙә һәр саҡ икмәк булһын өсөн "Бәләкәй түбә", һуңынан "Урал" колхозында ҡырҡ йыл ғүмерен ер эшенә арнай, йәшәү мәғәнәһен, тормош йәмен ҡыуанысл ы хеҙмәт емештәрендә күрә. Хеҙмәт ударнигы, социалистик ярышта еңеүсе булып таныла, сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереүҙә тырышлығы, хеҙмәт батырлығы өсөн миҙалдарға лайыҡ була. Алты бала үҫтерә, өсөһө колхоз эшендә.

Әхмәт ат ҡарай, ФЗО-ла уҡый, төҙөлөштә эшләй, армияла хеҙмәт итә, тракторсы һөнәренә өйрәнә, "Яйыҡ" колхозында механизатор булып эшләй. Ә уңғанлығы бәхет баҫҡысы һымаҡ алдына ята, һүрәте почет таҡтаһынан төшмәй, уңышлы хеҙмәте күкрәгендә миҙалдар булып балҡый. Биш балаһы ла үҫеп, үҙ һуҡмаҡтарынан атлай.

Ғүмерҙәре һиҙелмәй үтһә лә, заяға үтмәгән. Улар өсөн тыуған ер - иң ҡәҙерлеһе, туған тупраҡ - иң йылыһы. Ил-йорт йәмен арттырһындар, туған тупрағынан һыуынмаһындар ине уландар ҙа.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**"Ғүмер артында - ғүмер" китабынан.**
**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**

ҡара тәнле ҡол уларҙың араһында булмай. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре: "Әй, хужа, тағы ла ҡолдарың бармы һинең?" - тигәс, йорт хужаһы: "Тағы ла бер ҡара тәнле ҡолом бар", - тип, уны ла сығарып күрһәтә. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре: "Мин ошо ҡолдо алырмын, хаҡы күпме?" - тип һорай. Уныһы: "Егерме дирһәмгә алғайным, һиңә ун дирһәмгә бирермен", - ти. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре хужаның һорағаны ҡәҙәр ике өлөш биреп, ҡолдо ала ла ҡунаҡ өйөнә килтерә. Был ҡол Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәренә ҡарап: "Әй, хужа, мине ни өсөн һатып алдың? Хеҙмәт итергә минең ҡеүәтем дә, көсөм дә юҡ бит", - тип һорай. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре: "Мин һине хеҙмәт иттерергә алманым, ә үҙем һиңә хеҙмәт итеү маҡсатынан алдым", - ти. Ҡолдон: "Әй, хужа, ни өсөн былай эшләйһең, был ни тигән һүҙ ул?" - тигән һорауына, Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре: "Үткән көндә күрһәткән кирәмәттәрең өсөн", - тип яуап ҡайтара. "Әй, хужам, һин минең хәлемде төшөндөңмө?" Быныһы: "Төшөндөм", - ти. "Улай булһа, һин мине азат ит", - ти ҡол. Ғабдулла Мөбәрәк: "Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн азат иттем, алыуымдың маҡсаты ла шул",- ти. Шул саҡ ҡуктан бер тауыш ишетелә, ти: "Әй, Ғабдулла Мөбәрәк, Аллаһы Тәғәлә һине ярлыҡаны". Әлеге ҡол тәһәрәтләнеп, ике рәкәғәт намаҙ уҡый, намаҙҙан һуң доға ҡыла ла: "Ярабым, минең хәлем һиңә мәғлүм инде: утыҙ йылдан ашыу һиңә ғибәҙәт ҡыла инем, ғибәҙәтемде һис кемгә белгертмәскә вәғәҙә иткәйнең, бөгөн иһә белдерҙең. Инде мине донъяла тотма, йәнемде алсы", - ти һәм шул сәғәттә үк вафат була. Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре быға кәфен һыйып, уны намаҙ уҡып ерләй, ләкин кәфенләүен, ерләү ғәмәлен тейешенсә башҡармай. Шул кис Ғабдулла Мөбәрәк төш күрә: күркәм кейемле, матур йөҙлө бер кеше олуғ бер кеше менән йөрөп ята икән. Күркәм кеше быға: "Әй, Ғабдулла Мөбәрәк, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡмайһың да, оялмайһың да, имеш", - ти. Ғабдулла Мөбәрәк: "Һин кем?"- тип һорағас, уныһы: "Мин иһә Рәсүлегеҙ Мөхәммәт, юлдашым - атабыҙ Ибраһим бәйғәмбәр", - ти. Ғабдулла Мөбәрәк: "Әй, Алланың Рәсүле, ни өсөн Аллаһынан ҡурҡмайым һәм оялмайым, ти? Шуның өсөн намаҙымды ла, ураҙамды ла күп ҡылам бит", - ти. Рәсүлулла иһә: "Аллаһы Тәғәләнең изге йәндәренән бер кешене ерләнең, ләкин ғүзәлллек һәм илтифат менән ерләмәнең", - тигәс, Ғабдулла Мөбәрәк хәҙрәттәре йоҡоһонан уянып, ҡолдоң ҡәберен асып, яңынан матурлап кәфенләй һәм тәрбиә ҡыла...

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘГӘР. УЛ ЙЫҺАН ТӘРТИБЕ

Психиатрия клиникалары үҙ тормошон үҙгәртергә һәләтһеҙ пациенттар менән тулған. Был кешеләр үҙгәрештәрҙән ҡасыуҙың төрлө ысулдарын уйлап тапҡан. Ысынында иһә, бер кем дә уларҙан ҡасып ҡотола алмай. Шуға күрә беҙ уларҙы ҡабул итергә өйрәнергә һәм улар менән осрашыу көтөргә тейешбеҙ.

Асылда, үҙгәрештәр - улар һин теләгән нәмәләр. Һин был тормошта нимәнелер булдырырға, кемдер булырға, абруй ҡаҙанырға теләйһең. Велосипед урынына машинаң, фатир йәки бүлмәң урынына үҙ йортоң булыуын теләйһең. Әгәр ҡурҡыуыңды ситкә ташлаһаң, быларҙың барыһына ла эйә булырһың.

Үҙгәреш һинең фекерләү алымыңдың үҙгәреүен белдерә. Булыу ихтималлығы хаҡына булғанынан баш тартырға әҙерлекте лә аңлата был.

Әгәр үҙең ҡорған кәртәләрҙе емерергә йыйынһаң, башҡаларҙан айырылырға теләүеңде аңларға тейешһең. Бөтә танылған шәхестәр бер-береһенән айырыла.

Һин үҙеңдә ҡыйыулыҡ туплап, үҙ-үҙеңә: "Мин урта ҡул булырға теләмәйем. Мин - башҡа. Мин - фантастик киләсәк менән фантастик шәхес. Күңелһеҙ тормош - минең өсөн түгел", - тип әйтергә тейешһең. Ошо раҫлауҙарҙы ҡабат-ҡабат әйт! Бер минут та кисектермәй, хәҙер үк башла! Өйҙә бер үҙең ҡалған саҡта, баҫ та, ҡыҫҡырып әйт. Сәғәт йөрөй, ваҡыт үтә. Ошо мәлдән алып һин, уңышһыҙлыҡҡа осрауҙан ҡурҡыуҙың һине сорнап алыуына юл ҡуймай, ыңғай уйларға, һөйләргә һәм эшләргә тейешһең.

Тик үҙгәреш, башҡаларҙы һаңға һуҡмай, ғаиләң һәм дуҫтарың алдында үҙеңде өҫтөн тойорға тейешһең, тигәнде белдермәй. Үҙгәреш үҙең өсөн һөйләү һәм эш итеү хоҡуғыңды иғлан итеүҙе һәм бәхетең өсөн кәрәкле нәмәләрҙең барыһын да эшләүҙе аңлата.

Һинең бәхетең ҡалғандарға файҙа килтерһен. Иң элек үҙгәрештәргә ҡаршы тороуҙан тукта. Уларҙы ҡаршыларға һәм уларға ҡыуанырға өйрән. Һауа торошо үҙгәрә. Хөкүмәт үҙгәрә. Һине уратып алған даирә үҙгәрә. Бөтә йәмғиәттә үҙгәреш бара.

Иң мөһиме, дөрөҫ үҙгәрештәр яһа. Дөрөҫ үҙгәрештәр һәр ваҡыт ыңғай. Ваҡтөйөктән башла һәм үҙгәрештәр һинең йәшәү стиленә әйләнгәнсе дауам ит. Мебелеңде алыштыр, өҫ кейеме стилен үҙгәрт, фатирыңдағы әйберҙәреңдең урындарын алмаштырып ҡуй. Ниндәй ҙә булһа яңы ашамлыҡ татып ҡара. Әгәр үҙеңдең тышҡы йөҙөң менән ҡәнәғәт түгелһең икән, пластик хирургия буйынса белгес менән кәңәшләш. Үҙеңдә һәм дуҫтарыңды яңы "мин"ең менән таң ҡалдыр.

Тормошоңда ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла, һәр ваҡыт ыңғай эҙемтәләр хаҡында ғына уйла. Әгәр ҡаршы тороуҙан туҡтап, үҙгәрештәрҙе ҡабул итеп, яңы, күпкә алдынғыраҡ тәжрибәне үҙләштерә башлаһаң, ахыры мотлаҡ яҡшы тамамланасаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 10 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Медсестра". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/ф "Зачем я сделал этот шаг?" К 65-летию Влада Листьева. [16+]
15.00 Роберт Рождественский. "Эхо любви". Концерт в Государственном Кремлевском Дворце. [12+]
17.00 Д/ф "Геннадий Хазанов. "Без антракта". [16+]
19.25 Лучше всех! [0+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Юбилейный вечер Игоря Крутого с участием мировых звезд фигурного катания. [12+]
0.10 Т/с "Гурзуф". [16+]
1.10 Модный приговор. [6+]
2.00 Давай поженимся! [16+]
2.40 Мужское / Женское. [16+]
4.00 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45, 5.00 Д/ф "Батыр из Бадраково". [12+]**
**9.15 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**13.45 "Гора новостей". [6+]**
**14.00 Д/ф "Истории Победы". [6+]**
**14.45 Дорога к храму. [0+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00 "Во имя народа". Концерт, посвященный 125-летию со дня рождения Шайхзады Бабич. [12+]**
**18.15 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "Молодая гвардия". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 11 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Гурзуф". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Автомобили Второй мировой". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Генеральная уборка. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Молодая гвардия". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ездили мы на Макарскую ярмарку". [12+]**
**5.00 Историческая среда. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Гурзуф". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Спортивная история. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Молодая гвардия". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Ой, кто там лежит?" [12+]**
**5.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 13 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.15 Жить здорово! [16+]
10.20 Модный приговор. [6+]
11.20 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Т/с "Гурзуф". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**8.30, 5.00 Автограф. [12+]**
**9.00 "Ураза Байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан".**
**10.00 "Иман нуры" Концерт. [12+]**
**10.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**11.15 Добрые дела. [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45, 14.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**12.15 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**15.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**19.00 Концерт этно-группы "Йатаган". [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Т/с "Молодая гвардия". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Выходили бабки замуж". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.35 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.25 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ничто не случается дважды". Новые серии. [16+]
22.30 Вечерний Ургант. [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Тайная жизнь". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Сын отца народов". [16+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Д/ф "Этюд с натуры". [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Автомобили Второй мировой". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Молодая гвардия". [12+]**
**2.15 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**4.00 Д/ф "Истории Победы". [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 15 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.15 Д/ф Премьера. "Полет Маргариты". К 130-летию Михаила Булгакова. [16+]
14.00 Х/ф "Собачье сердце". [12+]
16.40 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Генерал Де Голль". [16+]
1.30 Модный приговор. [6+]
2.20 Давай поженимся! [16+]
3.00 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45, 6.15 История одного села. [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Автограф. [12+]**
**12.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.30 Колесо времени. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Творческий вечер, посвященный 65-летию народного артиста БАССР Азата Аиткулова. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30, 22.00 "Яңы моң". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.30 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Узник замка ИФ". [12+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 Спектакль "Долгое-долгое детство". [12+]**
**4.45 Д/ф "Весна 45-го". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 16 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Медсестра". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Премьера. "Доктора против интернета". [12+]
15.00 Х/ф "Белые росы". [12+]
16.40 "Тодес". Праздничное шоу в Государственном Кремлевском дворце. [12+]
18.45, 22.00 "Точь-в-точь". Лучшее. [16+]
21.00 Время.
23.00 Т/с Премьера. "Налет-2". [16+]
0.00 Д/с "В поисках Дон Кихота". [18+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Память сердца". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Йырҙарҙа йылдар". Лучшие исполнители башкирских народных песен. [12+]**
**18.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**0.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.30 Х/ф "Узник замка ИФ". [12+]**
**2.15 Спектакль "Дачники". [12+]**
**4.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 май "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+
**16 май "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт тарихы. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 май "Аҡ мөғжизә"** (М. Башкиров, М. Кәрим әҫәрҙәре буйынса), бала саҡ төштәре. 12+
**13 май "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+
**15 май "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 май "Вот так репка!"** (И. Токмакова). 12.00, 14.00 0+
**12 май "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 12+
**13 май "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). 12.00, 14.00 0+
**15 май "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). 12.00, 14.00 0+
**15-16 май "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 16.00 0+
**16 май "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12 май "Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 16+
**15 май "Бишкә тиклем һанайым"** (М. Бартенев), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 май "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+
**14 май Премьера! "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 12+
**16 май "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1442 һижри йыл.

| Май (Рамаҙан - Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (28) дүшәмбе | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |
| 11 (29) шишәмбе | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 12 (30) шаршамбы | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 13 (1) кесе йома | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:40 | 21:10 | 22:40 |
| 14 (2) йома | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |
| 15 (3) шәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |
| 16 (4) йәкшәмбе | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 19:46 | 21:16 | 22:46 |

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

# МАЙ АЙЫНЫҢ...

## шифалы үләндәре

**Май айында бик күп шифалы үләндәрҙе йыйып алып ҡалырға мөмкин. Был осорҙа һары умырзая, май ландышы, тиле шалҡан (сурепка), бәпембә, юл япрағы, ала миләүшә, сөйәл үләне, кәкүк баш (медуница лекарственная), бесәй тәпәйе, ҡыркбыуын үләндәрен; һаҙанаҡтың (багульник болотный) япраҡһыҙ ботаҡтарын; һалбыр ҡайын, ҡыҙыл көртмәле, тайтояҡ, кесерткән, үгәй инә үләне, кәкүк емеше (первоцвет весенний), ҡара ҡарағат, талҡанемеш япраҡтарын; ҡайын, аҡ шыршы, күк тирәк, уҫаҡ бөрөһөн; сирень, муйыл, алмағас, сейә, ҡыҙыл энәлек сәскәһен; айыу ҡурайы, дегәнәк, шифалы бәпембә, цикорий, керән, ҡырҡколас тамырын; балан, этмуйыл, имән ҡайырыһы, аҡтамыр тамырһабағын йыялар. Быларҙың барыһын да төрлө сирҙәрҙән дауаланыу өсөн ҡулланырға була, халыкта дарыу үләндәре булараҡ киң таралған ҡайһы берҙәре буйынса төрлө сығанаҡтарҙан алынған кәңәштәрҙе еткерәбеҙ.**

### Тиле шалҡан

Тиле шалҡан (сурепка обыкновенная) - был ҡый үләненең йәш, яҙғы япраҡтарын салатҡа ҡушыу яҡшы. Организмға витамин етешмәүгә бәйле ауырыуға һабышҡанда ғына ла түгел, хатта инфаркт һәм инсульт кисергәндән һуң терелергә лә ярҙам итә. Борондан халыҡ уның һуты йәки йәш үләне ярҙамында фалижды, мейе фалижы, быума ауырыуҙарын дауалаған. Йәш тиле шалҡан, бигерәк тә сәскә атҡан үләндән һығылған һут, енси әүҙемлек түбәнәйгән, аталыҡ орлоғо тейешле бүленмәгән осраҡта файҙалы булыуы һыналған. Үләндең ныҡ көслө бәүел ҡыуғыс сифатын һары һыу ауырыуы, шешенеү, бөйөр ауырыуҙары, ирҙәрҙең енес биҙе шешеүен (аденома простаты) дауалағанда ҡулланалар. Хатта организм хәлһеҙләнгән саҡта тиле шалҡандың киптерелгән үләненән сәй бешереп эсеү яҡшы.

**Быума, неврастения, аталыҡ орлоғо тейешле бүленмәгәндә енси әүҙемлек артҡанда.** 20 грамм тиле шалҡан үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 3 сәғәт төнәтергә, көнөнә 4 тапҡыр 40-ар мл эсергә. Тиле шалҡан йәй дауамында сәскә ата. Үләндең яңы әҙерләнгән һутын 1-2 ай дауамында көнөнә 2-3 тапҡыр 30-ар мл эскән саҡта, хатта оло йәштәге ирҙәргә лә дарман өҫтәй.

***Иҫкәртеү:*** *Тиле шалҡанды ҡан ағыуын туҡтатыу еңел булмаған, бөйөрөндә һәм бәүел ҡыуығында таш булған кешеләр һаҡ ҡулланырға тейеш.*

### Уҫаҡ

Уҫаҡтың (осина) кеше организмына файҙаһын һанап бөтөрлөк түгел. Бер яҡтан, уҫаҡ кешегә матди яҡтан ҙур ярҙам килтерһә, икенсе яҡтан, ул халыҡ медицинаһында иң ҡиммәтле дарыуҙарҙан һанала. Был ағас бөрөһөнән эшләнгән төнәтмә һыуыҡ үткәндән файҙалы, биҙгәк, пневмония һәм үпкәләр туберкулезынан ярҙам итә. Ошо уҡ төнәтмә менән цистит һәм башҡа бәүел ҡыуығы, бөйөр ауырыуҙарын дауалайҙар. Йәш ботаҡтарынан яһалған спиртлы төнәтмәне нейроревматизм булғанда ҡабул итәләр. Уҫаҡ бөрөһөнән ошондай төнәтмә яһарға мөмкин: ярты банка бөрө һалырға, тултырғансы араҡы ҡойорға. Төнәтмәне бер ай ҡараңғы урында тоторға.

**Ололарҙа бәүел ҡыуығы тотмау, подагра, ревматизм булғанда ошондай рецепт:** көнөнә 3 тапҡыр бер стакан һыу менән 25-30 тамсы төнәтмә ҡабул итергә.

**Мигрень.** Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан бер сәғәт алда ошо төнәтмәнән бер балғалаҡ эсеү ярҙам итә.

**Мастопатия.** 2 литр һыуға 600 г уҫаҡ ҡабығы һалып, һүрән утта 2 сәғәт ҡайнатырға. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Төнәтмәгә 0,5 л араҡы ҡойорға. Килеп сыҡҡан ҡушылманы 20 өлөшкә бүлергә. 20 көн рәттән ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

**Нефрит.** Уҫаҡтың ботағын, япраҡтарын һәм ҡабығын 1 стакан һыуға һалып, төнәтмә яһарға. 10 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3-5 тапҡыр ярты стакан ҡабул итергә. 3-4 аҙнанан 10 көнгә тәнәфес яһарға, әгәр кәрәк булһа, дауаланыуҙы дауам итергә.

**Панкреатит.** 0,5 литр һалҡын һыуға 3 ҡалаҡ уҫаҡ ҡабығы һалып, 10 минут бешерергә. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ ысул диабеттан да ярҙам итә.



### Кесерткән

Яҙғы кесерткән йомшаҡ та, файҙалы ла. Уны сәскә атҡанға тиклем йыйырға кәрәк. Борондан кесерткәнде яраны уңалтыусы, бәүел ҡыуыусы, организмды нығытыусы, эсте йомшартыусы, витаминлы, ҡорошҡаҡҡа ҡаршы, ҡаҡырыҡты сығарыусы сара итеп файҙаланғандар.

Кесерткән төрлө ҡанһырап торған яралар, геморрой, бөйөрҙә, үт ҡыуығында таш булғанда, тын ҡыҫылғанда, бауыр һәм үт юлдары ауырыуҙары, шешенгәндә, эс ҡатҡанда, йөрәк ауыртҡанда, туберкулез, ҡурылдай астмаһы, ҡурылдай ауырыуы, аллергия ваҡытында ҡулланыла. Шулай уҡ ул тире ауырыуҙары һәм сәсте нығытыу, үҫтереү өсөн да файҙалы.

Кесерткәндә аскорбин кислотаһы ҡара ҡарағатҡа һәм лимонға ҡарағанда 2 тапҡырға күберәк, каротин һырғанаҡ, кишер, ҡуҙғалаҡҡа ҡарағанда юғарыраҡ. Кесерткәндең 20 япрағы А витаминының көндәлек нормаһы менән тәьмин итә. Кесерткән K, E, B витаминдарына, тимер, магний, баҡыр, кальций һәм башҡа микроэлементтарға бай.

Составында кремний һәм органик кислоталар булыуы һөҙөмтәһендә ул организмды дөйөм нығытыу һәләтенә эйә: организмдың бик күп бактерияларға, токсиндарға, радиация йоғонтоһона ҡаршы тороуы көсәйә, иммунитетты нығыта, кислород етешмәүҙән юғары кимәлдә һаҡлай.

Кесерткән углевод һәм аҡһым алмашыныуын стимуллаусы булараҡ, уны бик йыш хроник ауырыуҙар ваҡытында ҡулланырға кәңәш итәләр. Ҡанды туҡтатыусы булараҡ, уны эске - аналыҡтан, үпкәнән, бөйөрҙән, эсәктәрҙән һ.б. ҡан килгән ваҡытта ҡулланалар. Әммә тап ошо ҡанды ойоштороу көсө арҡаһында уны ҡан тамырҙарының варикозы, тромбофлебит һәм ҡан ҡуйы булғанда, шулай уҡ ҡан баҫымы юғары, атеросклероз, бөйөрҙәр ауыртҡанда ҡулланыу ярамай.

### Сирень сәскәһе

Сирень сәскәһен ҡулланыуға әҙерләү өсөн бөрөләнгән саҡта иплән кенә ҡырҡып алып, 3-5-әүһен бергә йыйнап, ҡоро, яҡшы елләтелгән һәм саңһыҙ урында элеп ҡуялар. Сирень сәскәһе 1-2 аҙна тирәһе эсендә кибә, һуңынан уны ҡапҡасыябыҡ быяла һауытта йәки махсус ҡапсайҙа һаҡлағанда 1,5-2 йыл ҡулланырға ярай.

Сирень сәскәһенең араҡыға һалып эшләнгән төнәтмәһе шифалы һанала. Уны әҙерләү өсөн ҡыуаҡтың сәскәләрен һәм бер аҙ япраҡтарын быяла банкаға һалырға, дөйөм ауырлығы 95-100 грамм тартырға тейеш. Сеймалға 900 миллиметр спирт, араҡы ҡойорға һәм капрон ҡапҡас менән ныҡлы ябып, ҡараңғы һәм һалҡынсараҡ урынға 9-11 тәүлеккә ултыртырға. Төнәтмәне һөҙөп алырға кәрәкмәй, ҡараңғы һәм һалҡын урында тотҡанда 1 йыл тирәһе файҙаһы һаҡлана. Был рәүешле әҙерләнгән төнәтмә бөйөрҙә таш булғанда, йүтәл, үпкә туберкулезы, тапма ауырыуы, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, баш ауыртыу, быуын шеше, подагра, ревматизм, остеохондроз, төрлө бәшмәк ауырыуҙары, вируслы, бактериаль ауырыуҙарҙы дауалауҙа файҙалы. Һыҙлаған урынды сирень төнәтмәһе менән көнөнә ике тапҡыр ыуыу ярҙам итә. Ҡайны бер сирҙәрҙән дауаланыу тиҙерәк булһын өсөн үрҙә килтерелгән рецепт саҡ ҡына үҙгәртелергә мөмкин.

**Ҡан тамырҙарының варикозлы киңәйеүе.** 0,5 литрлыҡ банкаға сирень сәскәһен һалып, өҫтөнә араҡы ҡойоп, ай ярым төнәтергә. Шунан һөҙөп алып, тәндең зыян күргән урынын көнөнә 1-2 тапҡыр сылатырға кәрәк, ыуаламаҫҡа.

***Иҫкәртеү:*** *ашҡаҙан-эсәк юлы көслө ауырыуҙары, аменорея, гломерулонефрит, бөйөрҙең хроник ауырыуы булғанда һәм 16 йәшкә тиклем балаларға сирень төнәтмәһен ҡулланыу тыйыла.*

### Ҡуҙғалаҡ

Ҡуҙғалаҡ флавоноид, липид, аҡһым, минераль тоҙҙар, органик кислоталар (алма, ҡуҙғалаҡ, лимон кислоталары), каротин, B1, B2, C, K, PP витаминдарына бай.

Ҡуҙғалаҡ аш һеңдереү процесын, эсәк, үт ҡыуығы, бауырҙың эшен яҡшырта. Шулай уҡ был үлән колит ауырыуы төрҙәрен, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа ҡулланыла. Ҡуҙғалаҡ тулһеҙлектән дә ярҙам итә.

**Рецебы бик ябай:** 1 ҡалаҡ ҡуҙғалаҡҡа бер стакан эҫе һыу ҡойорға, һүрән утта 1 минут ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Стакандағы төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Ҡуҙғалаҡты бешкәнсе ҡайнатырға ярамай, был осраҡта ҡуҙғалаҡ кислотаһы барлыҡҡа килә.

Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары кислоталы гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.

### Аҡ тал

Аҡ тал (өйәнкә, ива белая) менән бер рәттә талдың башҡа төрҙәре лә халыҡ дауаһында ҡулланылыш таба. Өйәнкенең ҡабығы, япрағы, сәскәлеге ярҙамында ла дауаланалар. Һутҡа тулышҡан осорҙа талдың 3-4 йыллыҡ ботаҡтарынан ҡабығын һыҙырып алалар. Әммә шуны иҫтә тоторға кәрәк: һыу ситендә үҫеп ултырған талдың ҡабығын ҡырҡып, һыҙырып алырға ярамай. Сөнки был ағастың тамырҙары һыу булған ҡатламға тиклем китеп үҫә һәм талды ҡаты яралаһаң, һыу ҡаса.

Өйәнкене төрлө неврозлар, невралгия, ревматизм, подагра, һалҡын тейеүҙән барлыҡҡа килгән ауырыуҙарҙан, биҙгәк, гастрит, эсәктәрҙең елһенеүе, һары ауырыуы, бауыр һәм талаҡ ауырыуҙары, бәүел бүлеп сығарыу юлдары ауырыуҙарын дауалау маҡсатында ҡулланалар. Тал ҡабығынан әҙерләнгән сәй плеврит, хроник колит менән сирләүселәргә ыңғай тәьҫир итә, ә киптерелгән сәскәләренән төнәтмә тахикардия, экстрасистола булғанда дауа. Өйәнкә ҡабығы онтағынан эшләнгән мазь яра, язваларҙы йүнәлтә. Ангина, ауыҙ ҡыуышлығы һәм теш ҡаҙнаһының стоматит, гингивит, пародонтоз кеүек сирҙәренән өйәнкә ҡабығының төнәтмәһе менән сайҡау ярҙам итә, ә сәс ҡойолғанда дегәнәк япрағын өҫтәп баш йыуалар. Веналарҙың варикозлы киңәйеүен ҡабыҡтан ванналар эшләү ярҙамында дауаларға була.

**Тромбофлебит, веналарҙың варикозлы киңәйеүе.** 1 күнәк һыуға 250 грамм тал ҡабығын һалып, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм талғын утта тағы 15 минут тоторға. Шунан 37 градусҡа тиклем һыуытып, ярты сәғәт дауамында аяҡтарҙы шул һыуға тығып ултырырға. Аҙаҡтан аяҡтарҙы ял иттерергә, ҡалын йәки резина ойоҡтар кейергә кәрәк. Ауырыуҙың хәле тотороҡланғанға тиклем ошо рәүешле дауаланыу яҡшы.

**Тахикардия, аритмия.** Һары талдың (ива пурпурная) 100 грамм тирәһе аталыҡ сәскәлегенә ярты литр араҡы ҡойорға. Бер ай төнәтеп, һөҙөргә. Көн һайын бер ҡалаҡ һыуға 30-35-әр тамсы төнәтмә тамыҙып, ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Гинекологик ауырыуҙар, ҡан ағыуҙар.** 1 ҡалаҡ онтаҡланған ҡабыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, термоста 5-6 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс 1-әр ҡалаҡ эсергә. Аналыҡтан ҡан күп килгәндә көнөнә 6-7 тапҡыр, шулай уҡ 1-әр ҡалаҡ эсергә кәрәк.

**Ҡул ойоғанда, муйын тапҡыры һыҙлағанда, радикулит булғанда.** 1 балғалаҡ ваҡлап туралған тал ҡабығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һауыттың ауыҙын ябып, һыуынғансы төнәтергә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Гипотония - ҡан баҫымының түбәнәйеүе.** 1 ҡалаҡ ҡабыҡҡа 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, термоста 6 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне 3 өлөшкә бүлеп, тонусҡа килтереүсе сара булараҡ, ашарҙан 20-30 минут алда эсергә.

***Иҫкәртеү:*** *Тал сәскәләре бөтә йөрәк сирҙәренән дә шифалы түгел. Мәҫәлән, брадикардия булғанда уны ҡулланыу ҡәтғи тыйыла. Тал төнәтмәһе эсте тағы ла ныҡыраҡ ҡатыра. Уны ашҡаҙандың юғары кислоталылығына бәйле гастрит менән сирләгән осраҡта ғына түгел, ашҡаҙан һәм һуҡыр эсәк язваһы булғанда ла эсергә ярамай. Тағы бер мөһим иҫкәртеү: 16 йәше тулмаған балаларға аҡ тал препараттарын һыуыҡ тейгәндә, грипп һәм башҡа вируслы инфекцияларҙан бирергә ярамай, сөнки тал салицилат матдәләренә бай һәм был уҙ сиратында Рейе синдромы тигән үлемесле сиргә сәбәп була ала. Талды аспирин менән бергә ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ талдан әҙерләнгән дауаларҙы ҡулланғанда организмдан С витамины күп йыуылыуын иҫтә тоторға кәрәк.*

## ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

# ИРҘӘР ҘӘ ИЛАЙ



Атай... Әтей... Әтекәйем! Бына 24 йыл инде һине Бөйөк Еңеү байрамы менән ҡотлай алғаным юҡ.

9 май иртәләре бала саҡтан һәр саҡ ҡояшлы булып хәтергә уйылған. Мәктәп янындағы обелиск эргәһендә орден-миҙалдар таҡҡан сал сәсле ветерандар, улар араһында һис тә ташламаған, йөш сырайлы, ыҡсым, тәҙ кәүҙәле атайым...

Һуғыш тураһында һөйләргә яратманы ул. Бары тик өҙә-йолҡа ишеткәндәрем буйынса ла бала саҡтан уның ҡот осҡос фажиғә булыуын күҙаллай инем.

Башланғыс кластарҙа уҡыған сағымда төн уртаһында ишек шаҡығандарына уянып киттек. Өйгә оло ғына йәштәге бер уҙаман килеп инде: "Иптәш кесе лейтенант, исләйһеңме мине?" Баҡалы районында йәшәгән Сәгит исемле фронтташ эҙләп килгән икән атайымды. Тиҙ генә ҡоролған табын артында төнө буйы һөйләшеп-йырлашып сыҡты улар:

"Три танкиста, три весёлых друга -
Экипаж машины боевой..."

Йыры йыр инде... "Волоколамское шоссе", "Т-34", "паёк," "хата" кеүек бер ҡасан да ишетмәгән һүҙҙәрҙе гәжәпһенеп тыңлайым, унан бигерәк ике ветерандың ҡосаҡлашып илағанына аптырайым. Ирҙәр ҙә илар икән! Икенсе бүлмәлә әтһәм да һаҡ ҡолағым менән барыһын да ишетәм бит, артабан үҙем дә ҡушылып илайым, сөнки уларҙың һөйләгәнен сабый ғына аңыма һеңдерә алырлыҡ түгелмен:

- Исләйһеңме, Ханнанов, яуҙан һуң танкыларҙың гусеницаларын мәйеттәрҙең итенән таҙалап алырға тура килә торғайны...

- Тирләп-бешеп, дошмандан йәшерер өсөн танк һыймалы соҡор ҡаҙабыҙ ҙа, мәлә еткәс, танкыларҙы тиҙ генә кире ҡаҙып сығарабыҙ, ә тыштан 4- 45 градус һыуыҡ! Үпкә сире шунан килә лә инде...

Сәгит ағай һуңынан атайыма халыҡ медицинаһы рецептары яҙып, төрлө үләндәр менән бандеролдәр ебәрә торған булды...

Атайымдар 4 бер туған яуға киткән: Муллабай быуайым, атайым, Ғәбделхәй һәм Ғәбделхаҡ ағайҙарым. Тәҫкә ныҡ матур булған Ғәбделхәй ағайым, саҡ өйләнеп, Гәлиә еңгә менән бер нисә көн генә йәшәп өлгөргән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бабайым да, ағайым да һуғыштан ҡайта алмаған. Муллабай быуайымдың ҡатыны Мәғүзә әбей магазинда сиратта торғанда үҙ-үҙенә таҡмаҡ әйтеп, өҙә баҫып бейей ҙә китә торғайны. Беҙ, бер ни аңламаған бәләкәс ҡыҙҙар, шарҡылдашып көләшкән булабыҙ, ә әбейемдең күҙҙәре тулы йәш...

Тағы бер хәтирә...

Украинала булдымы икән был хәл, Беларустамы, төпсөнөп һорашырға баш етмәгән бит! Былай тип хәтерләр ине атайым: "Бер хатаға ингәйнек, күрәм, стенала мандолина элеүле тора. Хужаларҙан рөхсәт һораным да уйнап ебәрҙем башҡорт көйҙәрен! Ә уларҙың күҙҙәре дүрт булды:

- Ҡайҙан һин, һалдат?
- Башҡортостандан.
- Ә фамилияң нисек?
- Ханнанов!

- Бынан бер нисә сәғәт элек кенә беҙгә бер егет ингәйне. Ул да мандолинала тап ошо көйҙә уйнаны. Фамилияһы ла Ханнанов ине, бугай...

Теге егет, ысынлап та, Ханнанов булып сыға - һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан Ғәбделхаҡ ағайым! Ике яугир ҙа хатала "Карабайҙы" уйнаған икән...

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ



# Серле корал

*(Трудас ағай мәрәкәһе)*

Йылдағыса Еңеү көндәрендә
Ауыл өйө тулы ҙур йыйын.
Йолаһынса өҫтәл эргәһендә
Мәрәкәләү, көлкө, йыр, уйын.
- Трудас ағай, нисек һинең аяҡ
Фашистарҙың артын һыйаған,
Ниңә әле немец генералы
Ғәрлегенән ятып илаған, -
Тигән булып берәү һүҙ башлаһа,
Элеп алды ҡайһы берәүҙәр.
Мәрәкәләү түгел, был һоҡланып,
Ҡыйыулыҡҡа баһа биреүҙәр.
Һөйлә әйҙә, һөйлә, Трудас ағай,
Мәрәкәгә һинең хаҡың бар.
Көлөү түгел, хатта илай алмай
Мәңгелеккә ятып ҡалғандар.

* * *

Трудасимов атлы ажар егет
Янғаҙынан киткән һуғышҡа.
Унһыҙ унда аллә сик ҡуялар
Самаһынан азған ыҙғышҡа.
Ихласлығы, алсаҡлығы менән
Айырылған ағай күптәрҙән.
Юл буйына һөйләп мәрәкәһен
Һалдаттарҙың рухын күтәргән.

Үҙ ҡәҙерен үҙе белгән кеше
Ҡәҙерләйҙер йәлләп һәр йәнде;
Тәфтимендә биргән бер пар итек
Төтмәҫ инде, тиеп һөйләнде.
Европаны йәйәү үтер өсөн
Бер пар итек? Ғәфү итегеҙ!
Йәлләп тормаҫ һалдат гәзиз йәнен,
Түҙер микән бына итеге?
Йәйәү генә үтһән, йәнә бер хәл:
Ҡыуыр кәрәк ниндәй көтөүҙе!
Ҡыҙған мәлдә итек йәлләү түгел,
Юғалтаһың хатта бетеүҙе!..

* * *

Немецтарға хәҙер "полный капут"
Серле ҡорал бара фронтҡа.
Трудас ағай юлда кирза итек
Алыштырып алды ҡоротҡа.
- Ҡырҡ бишенсе размер итек менән
Арт һыныña берҙе елгәрһәм,
Татығаны түгел, һиҙгәне лә
Аҡ-ҡараны күрмәй елерҙәр! -
Ана шулай мәрәкәләр һөйләп
Йыуаталар йәштәр күҙҙәрен.
Алыҫайған һайын тыуған төйәк,
Сылаталар һағыш күҙҙәрен.

* * *

Күпте күргән ағай Европаны
Ҡорһағында шыуып уҙғанда;
Тере ҡалдым тиһә, йөрәк ҡаны
Ҡанһыраған кәбер ҡаҙғанда...
Яугир хеҙмәттәрен үтәгәндә,
(Ротаһында иң оҫта мәргән!)
Асыуынан йәне үртәлгәндә,
Аяҡ менән өҫтәп ебәргән.
Фашистарҙың осаларын һынап
Туҙҙырғанға, ғәфү итегеҙ,
Тип, шаярта икән беҙҙең ағай,
Майлағанда кирза итеген.

Старшина - йәне изге әҙәм,
Хупламаған сәйер ғәҙәтен.
Бер пар итек түгел, икәү биргән,
Белеп алғас уның һәләтен:
- "Катюша"нан артыҡ, -
тип әйткән, ти, -
Трудасимов һинең ҡоралың,
Ғәрләнмәҫтәр гәжәп һәләтенә
Ҡәрҙәштәрең, бөйөк Уралың".

* * *

Һөйлә беҙгә, һөйлә, Трудас ағай,
Һөйләгәндән зыян юҡ хәҙер.
Ғәмһеҙлеккә кеше башын һалған,
Ғәжәллеккә хәҙер юҡ ҡәҙер.
Майҙандарҙа ирҙәр тулып йөрөй:
Белгәндәре - ялыу тормошҡа.
Батырлыҡҡа түгел, бәғзеләре
Эшкинмәйҙәр ябай йомошҡа.
Һинең аяҡ, ағай, немецтарҙың
Арт һабағын байтаҡ уҡытҡан.
Йәштәргә лә һабаҡ булыр ине,
Кирза итек алып ултыртһаң.

* * *

Трудасимов Берлин фонтанына
Ташлап ҡайтҡан тиҙәр тин аҡса:
Үҙем килеп хәлде тәҙәтермен,
Шашып китһә тағы бер "ҡаҡса".
Байтаҡ йылдар үтте был енеүгә,
Йөҙ йыл үтер, хатта, мең йыл да.
Батыр үлмәҫ, халыҡ хәтеренә
Саялығы менән уйылһа.

**Урал МОСТАФИН.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МӘҠӘЛ - ҺҮҘ АСҠЫСЫ,

## әйтем - күңел асҡысы

Мең кеше менән эш ит, бер кеше менән кәңәш ит.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙең балалар өсөн ни ҙә булһа эшләйбеҙ, балалар ҙа беҙҙең өсөн ни ҙә булһа эшләһен ине.

**(Джозеф Аддисон).**

Беҙҙең балалар беҙҙән өлкәнерәк, сөнки улар бит киләсәктә һәм беҙҙән оҙағыраҡ йәшәйәсәк. Шуға ла улар беҙгә ят һымаҡ тойола ла инде.

**(Марина Цветаева).**

Ахмаҡтар ғына үҙ хатаһында өйрәнә; үҙ тәжрибәһен хаталанмай ҡорған кеше ысынлап та бөйөк.

**(Томас Фуллер).**

Зоопарк - кеше булырға өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын.

**(Эван Эзер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм кеше бер аҡһаҡал эргәһенә килә һәм уның йәнәшәһендә йәшәргә, унан донъяуи аҡылға өйрәнергә теләүен белдерә. Аҡһаҡал кунә һәм улар бергәләп йәшәргә ҡарар итә. Әммә яңы төркөм кешеләре аҡыллы һабаҡтар алыу, тормош тәжрибәһе туплау урынына, аҡһаҡалдың етешһеҙлектәренә төртөп күрһәтеп, уны туҡтауһыҙ тәнҡитләй, игәй башлай. Был хәлгә ҡарата аҡһаҡал шундай һүҙҙәр менән яуаплай:**

**- Һеҙ мине таш кеүек шымартырға итәһегеҙ, ләкин таштың да шымартыуға бирелмәй торған ҡытыршы урындары булған кеүек, минең холҡомдоң да ҡытыршылыҡтары бар - был кешенең үҙлеге тип атала. Һеҙ ҙә төрләнһәгеҙ һәм мин шулай уҡ һеҙгә оҡшамағанмын. Шундай аҡыл бар: Ҡояш төрлө объекттарҙы үҙенә тарта. Берәүҙәре уның орбитаһында тороп ҡала һәм йәшәү сығанағы таба. Икенселәре Ҡояш эргәһендә үҙҙәрен насар тоя, сөнки улар үҙҙәрен барыһынан да игтибар үҙәгендә булыр яҡтыртыусы итеп тоя. Уларға, киреһенсә, Ҡояш эргәһендә түгел, ә барыһының да үҙе тирәһендә әйләнеүе мөһим була. Ләкин эсендә ут булмаған, Ҡояш булып булмай һәм башҡа объекттарҙы үҙенә тарта алмайһың. Ошо хәҡикәтте аңламайынса, ул икенселәр Ҡояштан айырыла һәм Йыһанға осоп, боҙ киҫәгенә әйләнә. Ҡояш булырға теләү генә аҙ, эсеңдә Хоҙай уты йөрөтөргә лә кәрәк бит әле...**

**Аҡһаҡалдың телмәренән һуң бер аҙ уйланып та тормаҫтан: "Был аҡһаҡал бигерәк мыжыҡ, үҙе тураһында юғары фекерҙә. Беҙ уның эргәһендә ҡала алмайбыҙ", - тигән теге төркөм кешеләре һәм үҙҙәренең өҫтөнлөгөн танытырға теләп, икенсе тарафтарға юл тотҡан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21019

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**
Тиражы - 3400
Заказ - 307/05